ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14-20 май (һабанай) 2022

№ 19 (1009)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Сәләхтәрҙең девизы:

Тыныслыҡ. Изгелек. Кәрәклек.



6

Белемһеҙ аҡыллымы,



йәки Китап уҡымаған мәҙәниәтлеме? 8-9

"Айгүзәл"дәрҙә...

тамырҙарыбыҙҙы һаҡлар көс бар



11

Сабыйҙарыбыҙ...

уйнай-уйнай үҫһен!



12

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 757 һум 80 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Оҙайлы май байрамдарын ниндәй файҙалы эштәр менән уҙарҙығыҙ?

***Илнур ӘХМӘҘУЛЛИН, Өфө калаһы:*** Май байрамдарын ғаиләбеҙ менән көтөп алабыҙ. Ауылға, атай-әсәй янына ҡайтабыҙ. Апрелдең һуңғы эш көнө тамамланыу менән беҙ, ағайым һәм һеңлем, үҙ ғаиләләре менән Өфөнән, Ырымбурҙан һәм Салауат ҡалаһынан Белорет районына юлланабыҙ. Был йылдар дауамында традицияға әйләнгән һәм бер ниндәй эшкә лә, башҡа мәшәҡәткә лә уны боҙорға юл ҡуймайбыҙ.

1 май Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы айҡанлы осрашыу хөрмәтенә рәхәтләнеп ял итәбеҙ, мунса яғабыҙ, урманға сығып урайбыҙ, шешлек ҡыҙҙырабыҙ. Тағы ла ғаиләбеҙҙең ир-атына ғына ҡағылған традиция шул: май байрамдарында бесәнлегебеҙгә барып әйләнәбеҙ, унда йығылған ағастарҙы йыйып алабыҙ, эскәмйә һәм өҫтәлде рәтләйбеҙ.



2 май иһә иртә менән эш башлана. Ҡатын-ҡыҙҙар өйҙө, аласыҡты йыуа, ирҙәр ихатаны таҙалай, утын бысып яра, аҙбар тирәһен рәтләй, баҡса ҡаҙа. Ҡул араһына ингән балалар ҙа ситтә ҡалмай, үҙебеҙ белгәнде өйрәтеп-күрһәтеп, эш айышына төшөндөрә барабыҙ. Бер көслө зат мотлаҡ өйҙә "дежурҙа" була һәм бысраҡ һыуҙы түгеп, таҙаһын алып килә, әйберҙәрҙе шылдырыша, түбәне йыуғанда страховкалай һәм башҡалар. Беҙҙең ғаиләлә ҡатын-ҡыҙға ауыр әйбер күтәртмәйҙәр, шуға өй йыуғанда ла ҡул көсө кәрәк булған ерҙә ир-егеттәр ярҙамлаша. Һарыҡ йөнөн ҡырҡыу ҙа ошо байрамдар мәлендә башҡарыла.

Әлбиттә, был эштәр тураһында яҙыуы ғына тиҙ һәм еңел, ә эш барышы үҙе бер нисә көнгә һуҙыла. Көн һайын мунса инеп, мәтрүшкәле сәй эсеп, инәйемдең (Белореттың ҡайһы бер төбәгендә әсәйҙе "инәй" тиҙәр) тәмле аш-һыуын ашап, тыуған яҡ тәбиғәтенән көс йыйып, үҙ йорттарыбыҙға таралышабыҙ. Май байрамдарының тәүге яртыһын шулай беҙҙең ғаилә Белорет тарафтарында уҙғара ла, бер нисә көн эшләгәндән һуң, тағы ла оҙайлы ялдарҙы файҙаланып, кәләшемдең тыуған яғына - Стәрлебаш тарафтарына юллана быҙ. Унда ла ялдар эш менән үтә. Ләкин был эштәр бер ниндәй ҙә ауырлыҡ тыуҙырмай, уларҙан һуң хәл бөтмәй, киреһенсә, энергия туплап, тындар иркенәйеп, йәшәүгә дәрт арттырып ҡайтабыҙ Өфөгә.

*БАШ ҠАЛАМ*



# ТЕЛЕҮҘӘК -

## Өфөмдөң йөҙөк ҡашы

**Бөгөнгө яҙмам Өфөнөң иң билдәле районы - Телеүҙәк тураһында булыр. Әлбиттә, рәсми телдә бындай биҫтә баш ҡалала юҡ, ләкин халыҡ телендә ул нәҡ Телеүҙәк булараҡ билдәле. Өфөнөң йөҙөк ҡашы, тиһәм дә хата булмаҫ был яҡтар тураһында.**

Баш ҡалаға килгән ҡунаҡтарҙы, туристарҙы тәү сиратта ҡайҙа алып киләләр? Дөрөҫ, Салауат Юлаев майҙанына. Бейектән Ағиҙел йылғаһына, унан ары кисен төрлө уттар менән балҡыған Дим биҫтәһенә, аэропорт юлына, тимер юлы күперенә, Нуғай районы яҡтарына ҡарап тороу үҙе бер кинәнес. Шулай уҡ бында урынлашҡан "Торатау" Конгресс-холл бинаһының да үҙенсәлекле стиле күҙгә ташланмай ҡалмай.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

БАШ ҠАЛАМ



# ТЕЛЕҮҘӘК - Өфөмдөң йөҙөк ҡашы

(Башы 1-се биттә).

Зәки Вәлиди урамынан күтәрелгән саҡта әллә ҡайҙан балҡып ултырған Телеүҙәк бинаһы, вышка был тирәгә айырым бер төҫ бирә һымаҡ. Ләкин был тирәлә йәшәүселәр ни өсөн матур бинаны ҙур тимер ҡоймалар менән уратып алыуҙарына төшөнә алмайбыҙ. Нимәгә кәрәк булды икән ошондай матурлыҡты боҙоп, тимер ҡоршау ҡороуҙар?

Башҡорт дәүләт университетының мөхәббәт бинаһы, саҡ ҡына арыраҡ урынлашҡан М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының күркәмлеге - барыһы ла үҙ урынында, күптән өйрәнелгән һәм күңелгә яҡын.

Был районда заманса күп ҡатлы йорттар менән ағас йорттарҙың бер тирәлә урынлашыуы ла бер-береһен тулыландырып килгән кеүек. Ә студенттарҙың күп булыуы боронғо заман һулышы менән бөгөнгөнөң, йәшлектең бәйләнешен булдырып, күңелгә ниндәйҙер һиллек өҫтәй. Әлеге мин йәшәгән З.Вәлиди урамынан, уға терәлеп торған М.Ғафури, Аксаков һәм башҡа яҡын-тирә урамдарҙан атлап йөрөгән билдәле яҙыусыларыбыҙ һәм башҡа олуғ шәхестәребеҙҙең эҙҙәренән үтеү, үҙеңде ошо тарихтың бер өлөшө итеп тойоу әйтеп аңлатҡыһыҙ ғорурлыҡ тойғоһо кисерергә булышлыҡ итә. Улар ҙа бит Салауат Юлаев һәйкәле янынан алыҫ офоҡтарға ҡарап торған, Өфө, Башҡортостан тураһында уйланған.

Һуңғы йылдарҙа ғына бында, тап Телеүҙәк ҡаршыһында, күренекле шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл ҡалҡып сыҡты. Унын да Зәки Вәлиди урамын байҡап баҫып тороуы бик тә уңышлы уйланған һымаҡ та, ләкин... Унын янында тәүлек әйләнәһенә тауыш тынмай, машиналар көнөн-төнөн гөрләп үтеп тора, Салауат Юлаев майҙаны һәр саҡ кеше менән тулы була. Бер аҙ киңәйтеп, Бабич һәйкәлен дә майҙанға индереп ҡуйғанда бик тә шәп булыр ине. Ул шулай уйланғандыр ҙа инде һәм уны яҡын арала тормошҡа ашырырҙар тип ышанғы килә. Ғөмүмән алғанда, был тирәлә тормош ҡайнауы бер минутҡа ла туҡтамай һәм нәҡ ошо үҙенсәлеге менән оҡшай ҙа инде.

Беҙҙең тарафтарҙа юлдар яҡшы, социаль ойошмалар етерлек, укыу йорттары яҡын, театр һәм кинотеатрҙарға ҡул һуҙымы ара, йорт алдарында балалар майҙансыҡтары бар, сүп-сар тулып ятмай, ә ваҡытында түгелә, тип һанап үтеүемдең сәбәбе - был районда йәшәү өсөн бөтә уңайлыҡтар ҙа бар. Һәм шуның өсөн дә мин үҙем йәшәгән Телеүҙәк яғын бик яратам.

**Динислам ӘМИНЕВ.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# БАШ ҠАЛАБЫҘҘА... ҡурайға һәйкәл булһын!

**Кеше гәзит уҡымайынса нисек йәшәй икән, тип гәжәп ҡылам гел. Йәштәребеҙ интернет тотҡонона әйләнде, ти, ләкин шул хәлдә лә бит был башҡорт телендә нәшер ителеүсе матбуғат баҫмаларыбыҙҙы зым-зыя онотоу кәрәк тигәнде аңлатмай.**

Интернеттың үҙ урыны, үҙ һүҙе, уға, дөрөҫөн әйткәндә, һинең туған телең бар ни ҙә, юҡ ни... Башҡорт донъяһының иң көнүҙәк, ҡырҡыу мәсьәләләре бит тап ана шул үҙебеҙҙең туған телдәге гәзит-журналдарыбыҙҙа тупланып баҫыла, сағылдырыла һәм улар буйынса бергәләп фекер төйнәлә, теге йәки был мәсьәләне хәл итеү юлдары эҙләнә.

Бәғзе бер маңҡорт кәйефле әҙәмдәр баҫма матбуғатҡа көмһетеп, һаңға һуҡмай ҡараһалар ҙа, башҡорт рухлы илһөйәрҙәр һәм телһөйәрҙәр көсө менән гәзит-журналдарыбыҙ, шөкөр, йәшәп килә әле. Баҫма матбуғат үҙенең тоғро уҡыусылары, халҡына әйтер һүҙе булған йәмәғәт хәбәрселәре - авторҙары менән көслө. Үҙем, мәҫәлән, ғүмер буйы ҡосаҡ-ҡосаҡ гәзит-журнал алдырып уҡыған кешемен, ҡайһыларын хатта туплап, шәхси архивымда һаҡлап барам. Заманында "Башҡортостан" гәзите менән тығыҙ хеҙмәттәшлек иттем. "Киске Өфө" гәзитен ул сыға башлағандан алып, 20 йыл инде, яратып уҡыйым, сөнки тап ошо гәзит башҡорт донъяһын борсоған мәсьәләләрҙе күтәреп сыға, тарих темаһына ҙур урын бирә.

Был йәһәттән "Ватандаш" журналы хаҡында ла шуны уҡ әйтер инем. Ул ғына ла түгел, ошо баҫманың "әсеткеһе" мин булманыммы икән әле тип тә уйлап ҡуям. Ҡоролтай делегаты инем. Мәшһүр ғалимыбыҙ Р.Кузеев етәкләгән башҡорт тарихы секцияһында ҡатнаштым. Р. Кузеев көн тәртибендә алдан билдәләнгән сығыш яһаусыларға һүҙ бирә. Бына яҙыусы Йыһат Солтанов секция ултырышына килеп инеп, Ырымбурҙағы Карғанһарайҙы Башҡортостан милкенә күсереү мәсьәләһен күтәрмәк булды. Бындай етди секция эшендә ҡатнашыу бәхете тейҙе, мин дә һүҙһеҙ ҡалырға теләмәнем, әлбиттә. Сираттан тыш һүҙ алып, башҡорт тарихына, милли донъябыҙға арналған башҡортса гәзит йә журнал сығара башлау кәрәклеге хаҡында телмәр тотоп ташланым. Минең был тәҡдимде иғтибар менән тыңланылар, хупланылар һәм артабан, моғайын да, Р. Кузеев ошо фекергә төйнәләргә булышлыҡ итеп, уны ғилми йәмәғәтселек иғтибарына еткергәндер, тип уйлайым. Һәм, ысынлап та, тиҙҙән "Ватандаш" журналы ойошторолоп, донъя күрә лә башланы. Мин уны, әлбиттә, бик һөйөнөп ҡаршыланым һәм тәүге һанынан башлап ошо көнгәсә алдырам, бөтөн һандарын бергә туплап, ҡәҙерләп һаҡлайым, сөнки унда халҡыбыҙ тарихының данлы, шанлы биттәре яҡтыртыла, бигерәк тә тәүге һандарында йәмәғәтселеккә билдәле булмай, архивта ятҡан бик күп мәғлүмәттәр бирелә торғайны.

Бының менән мин, әгәр тормошҡа әүҙем ҡарашың булып, әйтер һүҙҙәрең тынғы бирмәһә, гәзит-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Оҙайлы май байрамдарын ниндәй файҙалы эштәр менән уҙғарҙығыҙ?

***Рәсимә ҒӘЙНЕТДИНОВА, Мәләүез районы:*** Ауылда йәшәүселәр өсөн "Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра", тигән мәҡәл үтә лә мөһим бит инде. Шуға күрә ялға ҡайтҡан балалар менән тәү сиратта бергәләп баҡса эштәрен атҡарып ҡалырға тырышабыҙ. Баҡсаны сүп-сарҙан таҙалап, ерҙе ҡаҙып, йәшелсә сәсергә әҙерләп ҡуябыҙ. Шулай ҙа мин орлокто ергә күмергә ашыҡмайым, ер яҡшылап йылынмайынса, ҡабаланып сәсеүҙең файҙа булмай икәнлеген оҙаҡ йылдар һынағанмын. Әлегә кишер генә сәстек тә, оҙайлы ялдарҙың байтаҡ ваҡытын сәйәхәттә йөрөп үткәрҙек.



Яҙҙың мул һыулы миҙгелендә беҙ мотлаҡ үҙебеҙҙең районда урынлашҡан Күперле шарлауығына барабыҙ. Иҫ киткес тәбиғәт күренеше ул шарлауыҡ, йыл да барһаҡ та ялҡытмай. Нөгөш һыуһаҡлағысы ла матур, ҡарап туйғыһыҙ.

Морат аша тура юлдан Бөрйән тарафтарына ла барып әйләндек. Шүлгән мәмерйәһенә ябалар икән, тигән хәбәр ишетелеп ҡалғайны, дөрөҫ була ҡалһа тип, тағы ла бер тапҡыр барып күреп ҡайттыҡ. Әлбиттә, мәмерйә тирәһе хәҙер үҙе бер ауыл һымаҡ, бынан 40 йыл элекке тәбиғәттең сафлығы, матурлығы әллә ни күренмәгән дә кеүек тәҫлә.

Тирмәнтауға менеп, Ағиҙелгә ҡарап торҙоҡ. Ләкин сүп-сарҙың шул тиклем дә күп булыуына иҫебеҙ китте. Ниндәй күңел менән шул матурлыҡты ҡыйлап китергә мөмкин һуң? Был "эште атҡарыусылар" үҙҙәрен тәбиғәтте яратыусы, сәйәхәтсе, рухи ял итә белеүселәр тип һанайҙармы икән? Балалар менән ҡул еткәнсе бер аҙ йыйыштырып ҡайттыҡ.

Бөрйәндәге туғандарға туҡтап, бәпес күрҙек. Яңы ғына өләсәй һәм олатай статусына эйә булған һылыуым менән кейәүемдең хатта күҙ ҡараштары үҙгәреп киткәндәй. "Баланың балаһы балдан татлы", тиеүҙәрен әле аңланым, ти туғаным. Балалар тыуып торһон, ил-йорт имен булһын, һаулыҡтан айырмаһын Хоҙай, башҡа ни кәрәк ошондай матур ерҙә тормош көтөү өсөн.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәш буйынса оперштаб ауырыу йоҡтороуға бәйле мәғлүмәттәрҙе яңыртты. Статистикаға ярашлы, пандемия башланғандан алып 287 123 сир осрағы теркәлгән. Һуңғы тәүлектә уларҙың һаны 61-гә артҡан. Коронавирус диагнозы раҫланған 54 кеше дауаханаға урынлаштырылған. Бөтәһе 280 764 кеше һауығып сыҡҡан, 80-е - һуңғы тәүлектә. Алты үлем осрағы теркәлгән. 12 майҙа Башҡортостан вакцина яһатыу буйынса 100 процент күрһәткескә өлгәште - 2,485 млн кеше тулыһынса прививкаланды.

✓Радий Хәбиров Башҡортостан аграрийҙарының май байрамдарындағы уңыштары хаҡында һөйләне һәм республиканы биш климат зонаһы буйлап, һәр берәһендә сәсеүҙең үҙ графигына ярашлы барыуын хәтергә төшөрҙө. Мәҫәлән, Ауырғазы һәм Ҡырмыҫҡалы райондарында яҙғы культураларға бүленгән майҙандарҙың яртыһынан күбеһе сәселгән, Әлшәй һәм Мәләүез райондары ла ошо билдәгә яҡынлашып килә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров эш сәфәре менән Урал арьяғы райондарында булды. Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында мәктәп төҙөлөшөн ҡараны. "Ҙур һәм кәрәкле объект. Әммә быға тиклем төҙөлөшкә тотонған подрядсы эште ахырына еткермәне. Билдәләнгән ваҡытҡа белем усағы тапшырылмағанға халыҡ, әлбиттә, ризаһыҙлыҡ белдерә. Мин уларҙы яҡшы аңлайым. Уртаҡ тырышлыҡ менән төҙөлөштө тергеҙҙек. Урындағы халыҡҡа мәктәпте 1 сентябргә тапшырырға һүҙ бирҙек. Быны наказ һымаҡ ҡабул итергә кәрәк", - тине Андрей Геннадьевич.

✓Башҡортостанда торлаҡҡа хаҡ билдәле булды. 2022 йылдың беренсе кварталында Башҡортостанда беренсел баҙарҙа торлаҡтың бер квадрат метрының уртаса хаҡы 91,3 мең һумға еткән, тип хәбәр итте республика статистикаһы. Хаҡ уҙған йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда 7,8 процентка артҡан. Ул ваҡытта яңы йорттарҙа бер квадрат метр 71,8 мең һум торған. Былйыл беренсе кварталда икенсел торлаҡ баҙарында бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 77,8 мең һум тәшкил иткән (4,2 процентка күберәк). Сағыштырыу өсөн: былтыр икенсел баҙарҙа бер "квадраттың" уртаса хаҡы 63,4 мең һум ине.

**✓ Беҙҙең ғаиләнең яҙылмаған ҡануны - бер көнөңдө лә бушҡа уҙғарма! Үҙең өсөн яңы файҙалы шөғөл табыу, уҡый башлаған китабыңды ҡулға алыу, спектакль йә концертҡа барыу һәм башҡалар.**



журналдарыбыҙ менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә йәшәргә, идея һәм фекерҙәрен баҫма матбуғат аша ла донъяға атҡарырға була, тимәксемен. Ошо юҫыҡта тағы бер теләгемдең ысынбарлыҡҡа әүерелеүенә шаһит булып, кинәнес кисерҙем. 1995 йылда булып үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат булараҡ, үҙебеҙҙең милли кейемдә килгәйнем. Кемдәрҙеңдер минә яҭһынылыраҡ төбәлгән ҡараштарына ла иғтибар итмәнем. Һәм бына, үҙегеҙ күрәһегеҙ, йәмәғәт, был идея әкренләп халҡыбыҙ араһында дәррәү яҡлау тапты һәм үҙенән-үҙе тәбиғи рәүештә көнитмешебеҙгә инеп тә китте. Бигерәк тә "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының бар сараларҙа, хатта урамда ла матур милли кейемдә йөрөүҙәрен күреп ҡыуанам. Бөгөн хатта милли кейем мәсьәләһе республикабыҙ етәкселеге тарафынан да хуплана. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беренселәрҙән булып милли стилдәге пинжәк тектереп кейеп, башҡаларға үрнәк күрһәтте, афарин!

Һүҙ ыңғайы тағы бер әлегә бойомға ашмаған фекерем хаҡында әйтеп киткем килә. Баш ҡалабыҙ Өфөлә ҡурайға һәйкәл ҡуйыу мәсьәләһенә ҡағыла ул. Өфөгә килеүселәрҙе бер яҡтан Салауат һәйкәле ҡаршылай, ә бына ҡалабыҙҙың икенсе яҡ ҡанаты булып ҡурайыбыҙға һәйкәл ҡалҡһа ине, тип хыялланам. Был хаҡта бөтөн гәзиттәргә лә тиерлек яҙҙым да яҙҙым, үкенескә, әлегә ул хыял ғына булып ҡала килә.

Әйткәндәй, ошо тирәләй Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров "Юлдаш" радиоһы менән әңгәмәһендә һүҙ ҡуҙғата биреп ҡуйғайны ҡуйыуын. Бәлки, уның тәҡдиме юл яра алыр?

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

**Әйткәндәй, Өфөлә "Үҙәк баҙар" түңәрәк юл сатына урынлаштырыласаҡ иң яҡшы арт-объект концепцияһын эшләү буйынса конкурс тамамланып килә. Әлеге көндә эштәр тәҡдим итеү туктатылған. Баһалама ағзалары 38 проект араһынан 29 эште һайлап алған һәм баш ҡала халҡына тауыш биреүгә сығарған. Эштәр араһында башҡорт ҡурайын һынландырған проекттар ҙа бар.**



### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Оҙайлы май байрамдарын ниндәй файҙалы эштәр менән уҙғарҙығыҙ?

***Илһам САФИУЛЛИН, Шишмә районы:*** Һәр кем яҙҙы көтөп ала. Бигерәк тә май айы - тәбиғәттең ҡышҡы йоҡонан уянған мәле, өҫтән ҡалын һәм ауыр кейемдәр, ниһайәт, сиселгән, ҡояш нурҙарын ҡыҙыулатҡан саҡ - бөтәһенең дә яратҡан миҙгеле. Ә май байрамдары үҙе бер бәләкәй отпуск һымаҡ - балалар уҡымай, ололар эшләмәй.

Беҙҙең ғаиләнең яҙылмаған ҡануны - бер көнөңдө лә бушҡа уҙғарма! Был мотлаҡ көн һайын баш күтәрмәйенсә эшләү тигәнде аңлатмай. Үҙең өсөн яңы файҙалы шөғөл табыу, уҡый башлаған китабыңды ҡулға алыу, спектакль йә концертҡа барыу һәм башҡалар. Оҙайлы ялдарҙа ла ошо ҡағиҙәнән ситләшмәҫкә тырышабыҙ.

Мәҫәлән, ҡышҡы оҙон ялдарҙа барыбыҙ ҙа тау саңғыһына баҫтыҡ. Майҙың тәүге көндәрендәге ялда Нөгөш һыуһаҡлағысына барҙыҡ һәм мин катер йөрөтөргә, кәләшем велосипедта елдерергә өйрәнде. Малай Өфөлә парашюттан һикерҙе, ҡыҙыбыҙ шулай уҡ баш ҡалала флористика серҙәренә төшөндө. Балалар тағы ла волонтер булып өлгөрҙө.

Өйҙәге эштәрҙе лә байтаҡ башҡарып ташланыҡ. Ҡатыным иҫәпһеҙ-һанһыҙ өй гөлдәрен барлап, тупраҡтарын алыштырып, яңы матур һауыттарға ултыртып сыҡты. Мин баҡсалағы ағастарҙы эшкәрттем, ағарттым. Шешлек бешереү урынын матурлап, беседканы буяп ҡуйҙым.

"Хәрәкәттә - бәрәкәт" икәнлеген хәтерҙә тотоп, көн һайын кис күмәкләп йәйәү йөрөнөк. Беҙ бөтәбеҙ ҙә совет заманында төшөрөлгән фильмдарҙы яратабыҙ һәм барыбыҙҙың да өйҙә йыйылған ваҡытын тап килтереп, бергәләп рәхәтләнеп комедиялар ҡараныҡ.

Шулай уҡ төрлө тарафтарҙан йәшлек дуҫтарыбыҙ килде, студент саҡтарҙы иҫләп, матур итеп ял иттек. 9 май улар менән бергә Өфөгә барып, "Үлемһеҙ полк"та ҡатнаштыҡ. Беҙгә тыныс тормошта йәшәргә, балалар үҫтерергә мөмкинлек биргән, Еңеү яулаусы яугирҙарҙы хөрмәтләп иҫкә алып, ҡайтышлай улар рухына бағышлап аят уҡытып, 9 май көнөн тик улар хәтеренә бағышланыҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

### КИЛЕШМӘЙЕМ!

# БОҪОП ҠАЛЫРҒАМЫ?



**"Бәйләнештә" селтәрендә бер иғлан йыш күҙгә салына. Дөрөҫөрәге, реклама. Уны күргән һайын тән сымырҙап, нәфрәтләнеп китәм. "Повестка - юҡ. Хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыға ярҙам" тип атала был аҡса эшләү сараһы.**

Күптән икеләнә инем, был хаҡта яҙырғамы, юҡмы? Һуңғы осор көн дә тиерлек күҙҙе сыбарлай башланы был әрһеҙ "ҡотҡарыусы"лар. Бөгөн меңәрләгән ир-егеттәребеҙ Украинаны фашизм ҡалдыҡтары - нацист бандаларынан таҙартыуҙа йәндәрен аямай алышҡанда, кемдәрҙер, тимәк, аҡса түләп, хеҙмәткә саҡырылыуҙан ҡасып ҡалырға самалай һәм шундай юл менән "аҡ" билетҡа эйә булыусылар бөрәү-икәү генә түгелдер. Бөгөнгө пост ҡына ла меңгә яҡын "лайыҡ" йыйған. "Беҙҙең клиенттар армияға бармай", - ти әлеге ҡотҡосолар һәм хеҙмәткә саҡырылыусылар артынан военкоматҡа эйәреп барып, граждандыҡ бурыстарын үтәргә тейешле егеттәрҙе... "ҡотҡарып ҡалырға" вәғәҙәләй.

Кемдәр улар, был эшем эйәләре? Ниңә ундай элементтарға социаль селтәрҙәрҙә урын бирелә? Призывник хоҡуҡтарын тыҡлыу һылтауы менән улар саҡырылыу йәшендәгеләрҙе генә түгел, уларҙың ата-әсәләрен дә консультацияға саҡыра һәм уларҙың улдарын ватаныбыҙға ауыр саҡта аҡса түләп, әлеге "хоҡуҡ һаҡсылары" арҡаһына ышыҡланып, боҫоп ҡалырға өгөтләй. Дөрөҫ, ата-әсәләрҙе аңларға була, бала һәр кемгә ғәзиз, тик шул уҡ ваҡытта Тыуған илгә хеҙмәт итеү йәше еткән һәр егеттең РФ Конституцияһына ярашлы граждандыҡ бурысы икәнен дә оноторға ярамайҙыр. Халыҡ бит борондан бындай һынау мәлдәрендә ил күргәнде күрербеҙ тип йәшәгән һәм үҙ улдарын ватанды һаҡлауға изге теләктәр менән оҙатыр булған. Ә был аҡса һуғыусыларҙы ил мәнфәғәтенә ҡаршы ҡотҡо алып барғандары өсөн күптән сит ил агенттары тип иғлан итергә һәм эшмәкәрлектәрен ябырға кәрәк тип уйлайым. Әллә мин яңылышаммы?

**Фәтхулла ИШБАЕВ.**

### БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# АҠСА АУЫЛДА ЛА КӘРӘК



**Ауыл урынында. Ул йәшәй. Уға бер ни ҙә булмаған. Бары эш (аҡса) эҙләп, уның йөрәгө булырҙай бер өлөшө урбанизация ҡолона әйләнеп, ауылдан китергә мәжбүр булған. Быны мин әле ауылда йәшәп тә йөҙөм ҡалаға йүнәлгән кеше булараҡ яҙам.**

Ауылда йәшәү менән ҡалала йәшәүҙең тәме башҡа - береһе ебәрмәй, икенсеһе әүрәтә, ымһындыра. Колхоз-совхоздар бөткәненә ике тиҫтәләп йыл үтһә лә, бер тин эш хаҡы алмаған ауыл халҡы йүнен табып йәшәүен дауам итә: элеккенән күберәк мал көтә, ҡош-ҡорт үрсетә, йәшелсә-емештән уңыш йыя. Ауылда эштән күп нәмә юҡ. Халҡыбыҙ тырыш, эшкә шәп, ихлас. Тик... кәсеп итә белмәй. Күпме көс сарыф итеп тапҡан малын аҡсаға әйләндерә алмай. Быны аңлап алған сосораҡ милләттәштәребеҙ, ситтән килгән кешеләр әрһеҙләнгәндән-әрһеҙләнә: ауыл халҡы етештергән тауарҙы осһоҙораҡҡа алып, ҡиммәткә осороп килем ала.

Гел уйлайым, элекке әҙерләү конторалары (заготконтора) хөкүмәт ярҙамы менән тергеҙелһә, ауыл тын алып ҡалыр ине, ни тиһәң дә, аҡса ауылда ла кәрәк бит әле!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Легендар генерал Миңлеғәли Шайморатовтың исеме халыҡ менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Башҡортостанда Заһир Исмәғилевтың Ҡәҙир Даяндың шиғырына яҙған "Шайморатов генерал" йыры күптән халыҡтыҡына әүерелгән. Уны Башҡортостанда, Тыуған илебеҙҙең бөтә мөйөштәрендә йырлайҙар. Быйыл "Шайморатов генерал" йыры ижад ителеүгә 80 йыл тула. 9 майҙа республиканың төрлө төбәктәрендә ҡатнашыусылар бер үк ваҡытта "Шайморатов генерал" йырын башҡарҙы.

✓Күптән түгел булып үткән "Яҡташлыҡ көсө" форумы эшендә Рәсәй Сит ил эштәре министрлығының махсус йөкләмәләр буйынса илсеһе, яҡташыбыҙ Азамат Ҡолмөхәмәтов ҡатнашты. Уның һөйләүенсә, атаһы - сығышы менән Ишембай районынан, әсәһе - Благоварҙан, үҙе Өфөлә тыуып үҫкән. Сығыш яһап: "Шәп идея, ин мөһиме - республикала йәшәүселәрҙең барыһы ла тыуған төйәге менән берҙәмлеген тойһон, бөтә өлкәләрҙә лә республика үсешенә үҙ өлөшөн индерһен өсөн ошо башланғысты дауам итеү", - тип билдәләне спикер.

✓Спортты яратаһыңмы? БДИ-нан өҫтәмә мәрәй ал! "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" Бөтә Рәсәй физкультура-спорт комплексының сайтында Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының 753-сө (13 август 2021 йыл) бойороғо баҫылған. Уға ярашлы, 2022-2023 уҡыу йылында ГТО тапшырып алтын, көмөш һәм бронза отличие билдәһе алыусыларға Берҙәм дәүләт имтиханларын тапшырғанда өҫтәмә мәрәйҙәр бирелә.

✓"Ветеринар поезд" хайуандар менән шөғөлләнә. Был поездың төп маҡсаты - берәҙәк хайуандарҙың иҫәбен кәметеү һәм республиканың төпкөл ауылдарында түбән хаҡҡа хеҙмәт күрһәтеү. Билдәле булыуынса, берәҙәк һәм йорт хайуандарының иҫәбен контроллəүҙең аныҡ ысулы булып уларҙы стериллəү тора. Һәр дәүләт ветеринар учреждениеһында стационар операция кабинеттары бар, унда хайуандарға квалификациялы ярҙам күрһәтелә, шул иҫәптән стериллəү, идентификациялау һәм вакцинация үткәрелә.

✓Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы 17 проценттан 14 процентҡа тиклем төшөрөү тураһында ҡарар ҡабул итте. "Рәсәй иҡтисады өсөн тышҡы шарттар ҡатмарлы булып ҡала, иҡтисади эшмәкәрлекте ныҡ сикләй. Шул уҡ ваҡытта хаҡ һәм финанс тотороҡлоғо өсөн хәүеф кәмене, был төп ставканы төшөрөү өсөн шарттар тыуҙырҙы", - тип хәбәр итеlә банктың Telegram-каналында.

✓ **Беренсенән, Үҙәк банктың төп ставкаһы түбәнәйә, тимәк, кредит ставкалары ла кәмей. Икенсенән, яғыулыҡ-майлау материалдарына хаҡтар артманы. Һумдың курсы нығынды һәм ул пандемиянан алдағы кимәленә етте.**



ҠЫҪҠАСА

# КЕМДӘР ЛАЙЫҠ?

**Рәсәй Президенты Владимир Путин рәсәйҙәрҙе дәүләт наградалары менән бүләкләү һәм уларға почетлы исемдәр биреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булғандар араһында дүрт яҡташыбыҙ ҙа бар. Өфөләге 42-се лицейҙың математика уҡытыусыһы Әлфиә Солтанова "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Өфө дәүләт нефть техник университетының "Нефть-газ промыслалары машиналары һәм ҡоралмалары" кафедраһы профессоры Фәнзил Мөғәллимов "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған нефть һәм газ сәнәғәте хеҙмәткәре" исемен алды. "Эш кейеме комбинаты" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры кәңәшсеһе Михаил Цукерманға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған туҡыу һәм еңел сәнәғәт хеҙмәткәре" исеме бирелде. "Инман" акционерҙар йәмғиәтенең етештереү логистикаһы хеҙмәте бүлеге начальнигы Ринер Ҡаһарманов "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған машина эшләүсеһе" исеменә лайыҡ булды.

✓ **Федераль үҙәк Башҡортостанға туристар ағымының артыуын билдәләй.** Хөкүмәт Рәйесе урынбаҫары Дмитрий Чернышенко Координация үҙәгендә йәйге туристик миҙгелгә әҙерлек, номер фонды һәм Рәсәй төбәктәрендә хеҙмәттәргә хаҡтарҙы күҙәтеү буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Ул шулай уҡ әлеге ваҡытта туристар араһында популяр булған ете төбәкте атаны. Вице-премьер һүҙҙәренсә, популяр ете төбәк иҫәбендә - Краснодар крайы, Мәскәү, Санкт-Петербург, Татарстан, Ставрополь крайы, Мәскәү өлкәһе һәм Ҡырым. Татарстанда, Башҡортостанда, Пермь һәм Алтай крайҙарында, Һамар өлкәһендә туристар ағымының һиҙелерлек артыуы күҙәтелә. Вице-премьер Туризм буйынса федераль агентлыҡҡа һәм Транспорт министрлығына Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә ял итеү сифатын тәьмин итергә ҡушты. Транспорт министрлығына төбәктәр менән берлектә төп транспорт артерияларында хәүефһеҙлек мәсьәләләрен махсус контролгә алырға, шулай уҡ был миҙгелдә туристар ағымы юғары булған урындарҙа юлдарҙы төҙөкләндереүҙе планлаштырмаҫҡа кәңәш ителә.

✓ **Абитуриенттар Башҡортостан вуздарына онлайн уҡырға инергә мөмкин.** Республика университеттарында һәм институттарында бөтәһе 12 381 бюджет урыны булдырыла. Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы мәғлүмәте буйынса, республиканың ете юғары уҡыу йорто 2022-2023 уҡыу йылына бакалавриат, белгеслек һәм магистратура программалары буйынса 12 381 бюджет урынына абитуриенттар ҡабул итә. Шул иҫәптән аспирантураға - 151 кеше (былтырғы уҡыу йылында - 127), ординатураға - 933 кеше (былтыр иһә 715). Йүнәлештәр буйынса һандар түбәндәгесә: мәғариф һәм педагогика - 2371 урын; геология, тау эше, нефть-газ эше һәм геодезия - 925; машиналар эшләү - 870 урын; информатика һәм иҫәпләү техникаһы - 869; клиник медицина - 807 урын. Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары икенсе йыл инде "Вузға онлайн уҡырға инеү" сервисы ярҙамында "Дәүләт хеҙмәттәре" аша абитуриенттарҙан ғаризалар ҡабул итә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТЕРЕ ТУПРАҠ, ТЕРЕ ХӘТЕР



**9 Майҙа Өфөнөң Совет майҙанында Рәсәй Геройы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовҡа ҡуйыласаҡ һәйкәл нигеҙенә Луганск Халыҡ Республикаһынан алып ҡайтылған һәм "Хәтер тупрағы" республика марафоны барышында Башҡортостан район-ҡалаларының барлыҡ мемориалдарынан йыйылған тупраҡлы гильза һалынды.**

Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, почетлы ҡунаҡтар, кадеттар, Өфө халҡы һәм ҡунаҡтары ҡатнашты. "Республиканың һәр мөйөшөнән беҙ берәм-бөртөкләп тупраҡ йыйҙыҡ. Капсулаға һуңғы ус тупраҡты беҙ Шайморатов һәләк булған ерҙән алып ҡайтып һалдыҡ. Был йоланы башҡарып, боронғо хәрби йоланы үтәйбеҙ. Мин һәйкәлдең Шайморатовҡа, легендар Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарына ғына түгел, ә тыуған еребеҙҙе һаҡлап һәләк булған барлыҡ атай-олатайҙарыбыҙға һәйкәл булырына, уның Салауат Юлаев һәйкәле, Еңеү паркындағы Мәңгелек ут, Дуҫлыҡ монументы кеүек уҡ изге урын булырына ышанам. Бөгөн, егеттәребеҙ Донбасты нацизмдан таҙартҡанда, еңеүҙең ни тиклем ауыр булыуын аңлайбыҙ. Мин ошо майҙанда йәш быуындың анты: "Салауат вариҫтары сигенә белмәй", - тип тамамланырына инанам", - тине Радий Фәрит улы.

Марафон 1 майҙа Өфөнөң Еңеү Паркынан башланып, 9 Майға тиклем тыуған ерен һаҡлап яуға киткән һалдаттарҙың һәр ауыл-ҡалаһы аша үтте, һәр ерҙә тантаналы саралар ойошторолдо. "Хәтер тупрағы"ның һуңғы нөктәһе Ҡырмыҫҡалы районының Шайморат ауылы булды. Унан тупраҡлы гильза хәрби техника оҙатыуында Совет майҙанына килтерелде.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ТОРМОШ КӨЙЛӘНӘ...

**Санкциялар шарттарында Башҡортостан иҡтисады әллә ни ҡатмарлыҡтар кисермәйәсәк, ул 143 төр ярҙам аласаҡ. Тәүге ярҙам пакеты 55 миллиард һум тәшкил итә һәм ул төҙөләш тармағына, бәләкәй һәм урта бизнесҡа, туризмға, агросәнәғәт комплексына бирелә.**

Иҡтисад фәндәре докторы Азат Йыһангиров фекеренсә, ил иҡтисады йылдам темптар менән тотороҡлана. Быны ҡайһы бер мөһим мәлдәр ҙә раҫлай: беренсенән, Үҙәк банктың төп ставкаһы түбәнәйә, тимәк, кредит ставкалары ла кәмей. Икенсенән, яғыулыҡ-майлау материалдарына хаҡтар артманы. Һумдың курсы нығынды һәм ул пандемиянан алдағы кимәленә етте. Башҡортостанда сит илдән индерелгән тауарҙарҙы урындағы етештереүселәрҙеке менән алмаштырыу тиҙ тормошҡа ашырыла.

Рәсәй иҡтисады дөйөм алғанда тотороҡланды һәм санкциялар баҫымына яраҡлашты, Үҙәк банк валюта биреүҙе сикләүҙе йомшартты. Мәҫәлән, 18 апрелдән кассаларға 9 апрелдә сығарылған валютаны һатып алырға рөхсәт ителде. Юғары иҡтисад мәктәбе иҡтисадсылары билдәләүенсә, валюта һатыу Үҙәк банктың башҡа "теҙгенде йомшартыуының" - бер юлы 300 базис пунктҡа процент ставкаларын кәметеү һәм валюта һатып алыуға 12 процент күләмендәге комиссияны бөтөрөү - логик дауамы булып тора. Ошо уҡыу йорто профессоры Евгений Коган белдереүенсә, Үҙәк банктың гәмәлдәре ығы-зығыны туҡтатып, хәл-торошто нормаллаштырырға ярҙам итте, инфляция әкренәйә башланы. Юғары иҡтисад мәктәбенең Донъя иҡтисады департаменты доценты Эдуард Джагитян фекеренсә, Үҙәк банк ил иҡтисадын санкция баҫымына яуап итеп алға барыуға яраҡлаштыра.

Төбәктең һәм федераль ярҙам саралары иҡтисадтың барлыҡ тармаҡтарының да, шул иҫәптән сит ил тауарҙарын алмаштырыу талап ителгәндәрен дә, үҫтереүҙең дөрөҫ стратегияһын һайларға ярҙам итәсәк, ти экспорттар.

# СИТ ИЛ ҠУНАҠТАРЫ

Баш ҡалалағы Еңеү көнөнә арналған сараларҙа сит ил ҡунаҡтары: Тажикстан Республикаһының Өфөләге вәкиле Эмом Саид Давлат, Болгария Республикаһының Өфөләге почетлы консулы Ярослав Шредер, Ҡырғыҙстан Республикаһының Өфөләге почетлы консулы Айрат Хәбиров, Беларусь Республикаһы илселегенең Өфөләге бүлексәһе етәксеһе Артур Карпович ҡатнашты.

"Был Рәсәйҙә генә түгел, элекке Советтар Союзы илдәрендәге төп байрамдарҙың береһе, - тине Артур Карпович. - Шуныһы ҡыуаныслы: ветерандарыбыҙҙың, хәбәрһеҙ юғалғандарҙың, һәләк булғандарҙың ҡаһарманлығын онотмайбыҙ. Беларусь Республикаһына килгәндә, Бөйөк Ватан һуғышы беларустар һәр өсөнсө кеше һәләк булған, шуға күрә ул беҙҙең өсөн бигерәк тә бөйөк байрам. Йыл һайын Беларусь Республикаһы илселегенең бүлексәһе асылған Башҡортостан Республикаһы территорияһында был сарала ҡатнашыуыбыҙға шатмын. Рәсәй менән Беларусь электән бергә булды, әле лә бергә һәм артабан да бергә буласаҡ! Беҙ күршеләр генә түгел, беҙ туғандар ҙа, ҡандарыбыҙ ҡушылған, шуға беҙҙе айырыуы ауыр, хатта мөмкин дә түгел!" Ярослав Шредер республика етәкселегенә саҡырыуҙары өсөн рәхмәт белдерҙе һәм: "Был сара халыҡта һуғышта еңеүселәр тураһында һаҡланған хәтерҙе, 1941-1945 йылдарҙа ниндәй ауыр осорҙо үтеүебеҙҙе сағылдыра. Бындай сараларҙа йәштәрҙең ҡатнашыуы ҡыуандыра", - тип билдәләне.

# МАХСУС ДӘРЕС...

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһында ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәренең 600-ҙән ашыу уҡыусыһы өсөн башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы буйынса лекция ойошторолдо. Балалар алдында Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Ш.Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, "Арғымаҡ" этно-төркөмө етәксеһе, Башҡорт йәштәре ҡоролтайы рәйесе Ринат Рамаҙанов сығыш яһаны.**

Дәрес башланыр алдынан уҡыусыларға Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты директоры вазифаһын башҡарыусы Элина Ғатауллина мөрәжәғәт итте һәм 2022 йыл Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан ителеүен иҫәпкә алып, "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын өйрәнеү һәм һаҡлау айырыуса көнүҙәк мәсьәлә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ә Ринат Рамаҙанов уҡыусыларға "Урал батыр" эпосының эхлаҡи йөкмәткеһе, әле лә уның көнүҙәк булыуы, үҙаллы үҫешеү өсөн туған телдәрҙе, йолаларҙы һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәнеүҙең, һаҡлауҙың мөһим булыуы тураһында һөйләне. Уҡыусыларға был махсус дәрес бик оҡшаны.

Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы ауыҙ-тел ижадының боронғо уникаль һәм тәрән фәлсәфәүи ҡомартҡыһы булып тора, уның йәше меңәр йыллыҡтар менән иҫәпләнә. Ул башҡорт халҡының тарихында, мәҙәниәтендә һәм күп быуатлыҡ рухи тормошонда абруйлы урын биләй. "Урал батыр" эпосы Рәсәй һәм донъя халыҡтары телдәренә, атап әйткәндә, сыуаш, мари, шулай уҡ инглиз, француз, немец, төрөк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һәм башҡа сит телдәргә тәржемә ителеп, баҫылып сыҡты.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Еңеү парадына 100 һуғыш, хеҙмәт ветераны һәм Рәсәй Геройҙары саҡырылғайны. 9 майҙа тантаналы сарала ҡатнаша алмағандар өсөн май айында йорт эргәһендә шәхси парадтар ойошторолдо. Баш ҡала хакимиәтенән белдереүҙәренсә, майҙа Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары Яндекс-такси хеҙмәттәре менән бушлай файҙаланырға мөмкин. Шулай уҡ республика халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге менән берлектә "Ветеран янибыҙҙа йәшәй" акцияһы үтә - ул яңғыҙ йәшәгән һуғыш ветерандарының өйҙәрен, ихаталарын таҙартыу, башҡа ярҙам күрһәтеү.

✓Өфөләге 3-сө бала табыу йортонон 2-се ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Волга буйы федераль округында акушер-гинекология йүнәлеше буйынса иң яҡшы медицина ойошмаһы конкурсында еңеү яуланы. Бүләкләү тантанаһы Татарстандың баш ҡалаһында VIII "Рәсәйҙең репродуктив потенциалы: Ҡаҙан уҡыуҙары" дөйөм Рәсәй конгресы барышында уҙҙы. Бынан тыш, 3-сө бала табыу йорто "III кимәлдәге иң яҡшы стационар" номинацияһында өсөнсө урынға лайыҡ булды. Конкурсты "StatusPraesens" махсуслашкан журналы репродуктив медицина белгестәренең дисциплина-ара ассоциацияһы 2016 йылдан ойоштора.

✓Йәйгеһен Өфө халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары өсөн ун рәсми пляж асыла. Был турала Өфө хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә ҡаланың Граждандарҙы яҡлау идаралығы начальнигы урынбаҫары Александр Григорьев хәбәр итте. "Карьер" пляжы - Тәрән күлендә, "Кояшлы" - Ағиҙел йылғаһында, "Кояш яры", "Сипайлово Сочиһы" - Өфө (Ҡариҙел) йылғаһында. Шулай уҡ Өфө йылғаһы буйында - "Комло", Йылы күлдә - "Гольфстрим", "Ожмах яры", Ағиҙелдә "Водник", "Аҡ яр Затон" һәм "Аҡ яр Нижегородка" пляждары эшләй.

✓Баш ҡала ағас скульпторҙары эшләү буйынса профессиональ һәм үҙешмәкәр скульпторҙар араһында асыҡ конкурс була. Унда юғары, һөнәри уҡыу йорттары студенттары һәм уҡытыусылары, дөйөм белем биреү, өҫтәмә белем биреү учреждениелары уҡытыусылары, һөнәри осталар, шулай уҡ командалар ҡатнаша ала. Ҡатнашыусыларҙың йәше 16 йәштән алып. Еңеүселәрҙең эштәре ҡаланы биҙәүҙә файҙаланыласаҡ. Конкурс асыҡ һәм бушлай, заявкалар 1 майҙан kult-ufa@yandex.ru электрон адресы буйынса ҡабул ителә.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ

# ЕҢЕҮ ӨСӨН РӘХМӘТ, ВЕТЕРАНДАР!

**9 Майҙа Өфөнөң Октябрь проспектында Бөйөк Еңеүҙең 77 йыллығына арналған тантаналы парад булды. Йыйылыусыларҙы, ветерандарҙы, парадта ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәбриклəп, үҙ телмәрендә герой-фронтовиктарҙың, тыл хеҙмәтсәндәренең, һуғыш балаларының ҡаһарманлығы тураһында хәтерҙә һаҡлау мөһимлеген билдәләне, республика халҡына ныҡлы һаулыҡ, именлек, бәхет һәм тыныс күк йөҙө теләне.**




Парадтан һуң Октябрь проспектынан ташҡын булып "Үлемһеҙ полк" үтте. Был акция Башҡортостандың баш ҡалаһында 170 мең кешене берләштерҙе. Улар араһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ғаиләһе лә, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев та бар ине. Радий Фәрит улы унда олатаһы - рядовой, һуғыштың башынан аҙағынаса үтеп, уны Монголияла тамамлаған, ауыр яраланған Барый Латиф улы Хәбиров портреты менән ҡатнашты. "Олатайым һәм фашизмды еңгән барлыҡ халыҡ ҡаһарманлығы алдында башымды эйәм. Рәсәйҙә үҙенең геройы булмаған бер генә ғаилә лә юҡ. "Үлемһеҙ полк" - атай-олатайҙарыбыҙға, ҡарт олатайҙарыбыҙға Еңеү өсөн рәхмәт әйтеү һәм берҙәмлегебеҙҙе күрһәтеү мөмкинлеге ул", - тип яҙҙы ул социаль селтәрҙәрҙәге үҙ сәхифәһендә.

Ратмир Рәфил улы ла үҙ тәьҫораттары менән социаль селтәрҙәр аша бүлеште: "Олатайым, сығышы менән Стәрлебаш районынан булған Лотфрахман Абдрахман улы Халиҡов һуғыштың башынан алып 36-сы танк дивизияһының 36-сы айырым автотранспорт батальонында хеҙмәт итә. Һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтып, Вазифа Ғибәҙулла ҡыҙы менән 4 бала тәрбиәләп үҫтерәләр. Бөйөк Ватан һуғышы - һәр ғаилә тарихының бер өлөшө. Төрлө быуын вәкилдәре иңгә-иң терәшеп үҙҙәренең геройҙары портреты менән үтә. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ яҙмышы, әммә маҡсаттары бер - Еңеүгә ынтылыш".

**Был көндө күптәр "Үлемһеҙ полк"та ғаиләләре менән ҡатнашты. Уларҙың фекерҙәре менән түбәндә таныша алаһығыҙ.**

***Илнур МӘХМҮТОВ:*** "Йыл һайын "Үлемһеҙ полк"та ҡатнашабыҙ. Олатайыбыҙ Ишбулды Әхмәтғәли улы Мәхмүтовты 1940 йылда армияға алалар, ул Хәрби-диңгеҙ флотында авиация моторисы булып хеҙмәт итә. Хеҙмәте тамамланыу алдынан һуғыш башлана һәм олатайыбыҙ фронтҡа эләгә, самолеттарҙы ремонтлай, уларҙы алышҡа әҙерләй. Архивта ҡыҙыҡлы яҙма таптыҡ - 1944 йылдың июненән 1945 йылдың майына тиклем Ил-2 штурмовиктарының 160 осошон тәьмин итә. Ул Ленинградты азат итеүҙә ҡатнашҡаны, хәрби ҡаҙаныштары һәм фашистик Германияны еңгәне өсөн миҙалдар менән наградлана".

***Раушан РӘХМӘТУЛЛИН:*** "Быйыл үҙенсәлекле ваҡиға, сөнки тажзәхмәт арҡаһында ике йыл "Үлемһеҙ полк"ҡа тупланмағайныҡ. Бөгөн, беҙҙең ғәскәрҙәрҙең Украинала махсус операцияһы барған ваҡытта был сара икеләтә мөһим, көнүҙәк һәм кәрәкле. Беҙ ысын мәғәнәһендә мөһабәт акция шаһиттары булдыҡ - минеңсә, бында яңы саҡ атлай башлаған сабыйҙарҙан алып ололарға тиклем ҡатнаша. Мин атай-әсәйемдең портреттары, үҙемдең геройҙарым менән килдем. Атайым Рауил Ғөбәйҙулла улы - Сталинград һуғышын үткән, әсәйем - хеҙмәт фронтында ҡатнашҡан, оҙаҡ йылдар ауыл хужалығында эшләне, тыл хеҙмәтсәне. Улар Еңеүгә бәләкәй, әммә бик мөһим өлөш индергән. Минеңсә, бөгөн халҡыбыҙ патриотизм идеяһы тирәләй һәм фашизмға ҡаршы тағы ла нығыраҡ берләшәсәк. Беҙ хаҡ юлда".

***Раушания ҒАБДРӘХИМОВА:*** "Олатайыбыҙ Кенәз Баҙиҡ улы Баҙиҡов Миңлеғәли Шайморатовтың билдәле кавалерия дивизияһы составында була. Һуғыштың башынан алып аҙағынаса үтә һәм бик күп хәрби яра ала, һуғыштан уң ҡулһыҙ ҡайта. Үкенескә күрә, ул 72 йәшендә вафат булды. Йылдан-йыл ветерандарыбыҙ кәмей, шуға күрә бындай парад - ҡәҙерле һәм әһәмиәтле".

***Наталья ИВЛЕВА:*** "Бындай саралар кешеләр араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға һәм йәмғиәтте берләштереүгә йөгөнтө яһай. Минең ҡаһарман атайым һуғышты башынан аҙағынаса үткән, ә әсәйем тылда ойоҡбаштар бәйләгән, эске кейем теккән, быйма, аҙыҡ-түлек йыйып фронтҡа оҙатҡан".

***Марат ҒӘЛИМОВ:*** "Мин ҡартатайымдың, лейтенант Шакирйән Хажи улы Ғәлимовтың портреты менән килдем. Ул - Ҡыҙыл Йондоҙ ордены кавалеры, хәрби бурыс үтәгәндә минаға баҫып шартлай, аяғын юғалта, һуңынан тылға ҡайтарыла. Ә тормош иптәшемдең ҡартатаһы - өлкән сержант Тәлғәт Әхйәрулла улы Йәнекәев та ҡаһарман кеше. Икенсе олатайымды йәше буйынса хеҙмәткә алмайҙар, әммә уның шул тиклем фронтҡа барғыһы килә. Ә бына ҡарт олатайым фин һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында ҡатнаша. Минеңсә, ул ваҡытта һуғыш һәр икенсе ғаиләгә ҡағылғандыр һәм бөгөн Украинала барған махсус операция мотлаҡ тыныслыҡҡа һәм именлеккә алып килер".

ҠЫҪҠАСА

## ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ ҠАСАН?

**Баш ҡалала Һуңғы ҡыңғырау көнөндә бейеү флешмобы уҙғарыласаҡ. 2022 йылда 4 853 уҡ беренсе класс уҡыусыһы өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғырай.** Баш ҡалала байрам 25 майҙа "Торатау" конгресс-холы майҙансығында ойоштороло. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева хәбәр итеүенсә, сығарылыш уҡыусылары вальс башҡарып, бейеү флешмобында ҡатнаша, уҡытыусылар күмәкләп хор менән йырлай, ә ата-әсәләр үҙенсәлекле ҡотлау менән сығыш яһай. "Мәктәп тамамлау - онотолмаҫ байрам. Сығарылыш уҡыусылары был көндө ғүмерлеккә хәтерендә ҡалдырырлыҡ итеп ойошторорға теләйбеҙ. Күләмле, яуаплы сара. Беҙҙең төп бурысыбыҙ - байрамда ҡатнашыусыларҙың һәм ҡунаҡтарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү", - тине Өфө вице-мэры. Алдараҡ "Башинформ" агентлығы республикала Һуңғы ҡыңғырау байрамы көнөндә алкоголь продукцияһын һатыуҙы тыйыуҙарын хәбәр иткәйне.

✓ **Рәсәйҙә "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программаларының шарттары киңәйтелде.** Хәҙер табиптарға ауыл еренә күсенеү мотлаҡ түгел. Ҡала тибындағы ҡасабаларҙа һәм ҙур булмаған ҡалаларҙа йәшәгән медицина хеҙмәткәрҙәренә лә ярҙам күрһәтелә. "Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү" дәүләт программаһына тейешле үҙгәрештәр индерелде. Студент-медиктар, шулай уҡ медицина колледжын тамамлап (шул иҫәптән, маҡсатлы уҡыу тураһында килешеү нигеҙендә), тыуған төйәгенә эшкә ҡайтҡан табиптар дәүләт ярҙамына иҫәп тоторға мөмкин. Табиптарға - бер миллион һум, фельдшерҙарға, акушерҙарға һәм шәфҡәт туташтарына 500 мең һум түләнә. Алыҫ, барып етеүе ауыр булған ерҙә урынлашҡан торак пункттарҙа компенсациялар 1,5 миллион һәм 750 мең һумғаса арттырыла. Алыҫ Көнсығыш, Алыҫ Төньяҡ һәм Арктика зонаһы төбәктәрендә түләүҙең күләме - 2 миллион һәм 1 миллион. Компенсация алыу өсөн медицина хеҙмәткәрҙәре дауалау учреждениеһы менән килешеү төҙөргә һәм унда биш йыл эшләргә тейеш.

✓ **Водитель таныҡлығының ғәмәлдә булыу ваҡыты оҙайтыла.** Ғәмәлдә булыу ваҡыты 2022 йылдың 1 гинуарынан 2023 йылдың 31 декабренә тиклемге осорҙа тамамланған ЮХХДИ биргән водитель таныҡлыҡтары автоматик рәүештә оҙайтыла. Ведомство хеҙмәткәрҙәре ваҡыты үткән таныҡлыҡтарҙы ҡабул итә һәм кәрәк булһа, уларҙы база буйынса тикшерәсәк. Рәсәйҙә 5 миллион автомобилсе таныҡлығының ғәмәлдә булыу ваҡыты оҙайтыласаҡ. Был яңылыҡтың инициаторы - Рәсәй Эске эштәр һәм Иҡтисади үҫеш министрлыҡтары. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте вәкәләттәре сиктәрендә бойомға ашырылған һәм граждандар, бизнес өсөн административ көсөргәнеште кәметеүгә йүнәлтелгән. Таныҡлыҡ ваҡытын оҙайтыу транспорт өлкәһе предприятиеларын артыҡ көсөргәнештән ҡотҡара, ил буйынса тауар ташыуҙы ябайлаштыра. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Башҡортостандың Дәүләт автоинспекцияһының элекке етәксеһе Динар Ғилметдинов билдәләүенсә, дәүләт хеҙмәттәренә аҡса, документтар тултырырға ваҡыт сарыф итергә тура килмәйәсәк. Шулай уҡ Алыҫ Төньяҡ райондарында теркәлгән һәм хәүефле йөк ташыу өсөн тәғәйенләнгән транспорт сараларының диагностика картаһы 12 айға оҙайтыла. Был сара 600 компанияға ярҙам итәсәк.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйыра, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Табандар ярылһа

Табандар ярылыуы бөйөр ауырыуҙарына бәйле булырға мөмкин, тип иҫәпләй халыҡ табиптары. Шуға тәү сиратта бөйөрҙө таҙартырға кәрәк. 1 литрлыҡ банканы йыуып киптерергә. Шуның өстөн бер өлөшөнә тиклем аҡ шыршының ваҡланған ҡайырыһын тултырырға. Шунан мөлдөрәмә тулғансы һыу ҡойоп, һыу парына ҡуйырға. Ҡайнар хәлгә еткеререгә һәм 1 сәғәт талғын утта һыу парында быҡтырырға. Шунан һөҙөргә. Килеп сыҡҡан дауаны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 50-шәр мл эсергә. Ҡайнатманы һыуытҡыста һаҡларға кәрәк, әммә ҡулланырҙан алда мотлаҡ йылытырға. Бөйөрҙәр таҙарына барған һайын аяҡ табандары ла ярылмай башлай.

### Ҡулдар шешенһә

2 балғалаҡ аҡ әнис орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыу парында йәки талғын утта 5 минут быҡтырырға. Һыуынғансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Килеп сыҡҡан төнәтмә бер тәүлеккә иҫәпләнгән, уны ошо ваҡыт эсендә аҙлап уртлап эсеп бөтөргә кәрәк. Дауаланыу - 1 аҙна. Кәрәк булғанда ҡабатларға мөмкин, әммә 2 аҙна тукталып торорға. Әйткәндәй, аҡ әнис орлоғо бөйөл бүленеүен йышайта, әммә ҡулланырға ярамаған осраҡтары, шәхси үҙенсәлектәргә бәйле булмағанда, юҡ.

### Тамаҡ төйөлһә

Аш тамаҡҡа төйөлһә һырғанаҡ майы эсергә кәрәк. Уны дарыуханан һатып алып көн һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда, дүртенсеһен йоҡларҙан алда ҡабул итергә. Хәл 1 аҙнанан яҡшыра, әммә тағы ла 3 көн май эсеүҙе дауам итергә (барлығы 10 көн). Иҫкәрмә: һырғанаҡ майын ашҡаҙан аҫты бизе, үт ҡыуығы һәм бауырҙың елһенеү процестары (холангит, холецистит, панкреатит, үт ҡыуығында таш булғанда) ҡатмарлашҡан осорҙа ҡулланыу тыйыла. Шулай уҡ эс киткәндә лә был рәүешле дауаланыу ярамай.

**Гөлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

✓ *Һәр төрлө негатив мәғлүмәттәр менән, йәнәһе, алдынғылыҡты бирмәгән ҡайһы берәүҙәрҙең танауҙарына сиртте сәләхтәр. Беҙҙе ауылдың типһә тимер өҙәрҙәй утыҙлаған ир-егете гармун уйнап ҡаршы алды!*



## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Соҡоп эшләнгән һауыт-һаба етештереү үҙәктәре күп булһа ла, уларҙы эшләү ысулдары бер-береһенән артыҡ айырылмаған, эш ҡоралдары ла бер төрлө булған. Төҙ, тарбаҡланып үҫмәгән ағас табып ҡырҡып, ботаҡтарын сабып таҙартҡандар. Шунан алып ҡайтып кәрәкле ваҡыт тотҡандан һуң кәртәлә йәки оҫтахана алдында ҡабығын әрсегәндәр. Материалдың сифатына, бүрәнәнең ҡалынлығына һәм кәрәкле һауыттың киңлегенә ҡарап олонон әҙерләмәләр өсөн бысып, ныҡлап киптергәндәр. Ҙур көбәләр өсөн ағастың тамырына яҡын өлөшөн ҡулланғандар. Оҫта эште еңеләйтер өсөн ҡаты үҙәген яндырған. Тышҡы яғын йышҡы (юнғы) менән таҙартҡан. Һауыттың эсен аталғы, бөрәз, бағау, ҡасау кеүек эш ҡоралдары ярҙамында соҡоған. Үҙағасты эш ҡоралына сүкеш менән һуғып, буй-буй тапсыҡтар рәүешендә берәмләп айырып алғандар. Шунан һауыттың ситтәре эстән йомро йышҡы йәки ҡырғыс менән ҡырып таҙартылған. Ауаҡ әҙер цилиндрҙы бешекләп, имән йәки сағандан түңәрәк төп индереп ҡуйғандар. Ҡайһы бер көбәләрҙең ағас йәки туҙҙан ҡапҡасы булған. Май һәм ҡымыҙ көбәләренең бешкәктәре лә эшләнгән; уларҙы ҡайһы берҙә нәҙек олонло ағастың тамырын бөтөн көйөнсә ҡалдырып юнып эшләгәндәр.

Көбәләрҙең күбеһе тура, бер аҙ ҡыяраҡ ситле булған; аҫҡы диаметры өҫкөһөнән бер ни тиклем оҙонораҡ эшләнгән. Тик һитә балы йәки ҡымыҙ менән һыйлауға тәғәйенләнгән һауыттар ғына йомроraҡ итеп эшләнгән. Уларҙың ҡырҙары ҡабарынҡыраҡ, ә ҡапҡастары ауыр булған.

Тәғәйенләнешенә ҡарап көбәләр һыйҙырышлығы, бейеклеге һәм киңлеге менән дә айырылған. Бейек һәм сағыштырмаса тар һауыттар май һәм ҡымыҙ әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән. Уларҙың бейеклеге диаметрынан яҡынса өс тапҡырға оҙон булған. Ҡымыҙ һауыттары - көбө, гөбө, ҡымыҙ батманы - 5-7 биҙрә һөт һыйҙырышлы итеп эшләнгән; диаметры 25-30 сантиметр булһа, бейеклеге ғәҙәттә 70, 80, 90 сантиметр, ҡайсаҡ 1 метр тәшкил иткән. Ҡымыҙҙы бешкәндә, кәрәк булһа, тәпәш кенә эскәмйәгә баҫып эшләгәндәр. Май көбөләре (көбөсәк, айран көбөһө, батман һ.б.) унан да тарыраҡ булған: диаметры 15-20 сантиметр. Уларҙың оҙонлого төбәктәр буйлап айырылған, урындағы ғөрөф-ғәҙәттәрҙән торған. Көньяҡ-көнсығыш райондарҙа урындыҡҡа ултырып ҡуйы ҡаймаҡты айранға ҡушып бешкәндәр, майҙы бер-ике ашарға етерлек кенә итеп аҙ-аҙлап ҡына йомарлағандар. Көньяҡ-көнсығыштағы ауылдарҙа ҙур булмаған айран күнәктәрен (35-40 сантиметр) үҙ эргәләренә урындыҡҡа ҡуйғандар. Шыйыҡлыҡ тышҡа сәсрәмәһен өсөн уларҙы бешкәк һабы һыйырлыҡ ҡына тишек ҡалдырылған шылдырмалы ҡапҡас менән ҡаплағандар. Икенсе осракта, урындыҡта йәки бүкәнгә ултырып, ҙур һауытты иҙәнгә аяҡ аҫтына ҡуйғандар. Күп кенә төбәктәрҙә, бигерәк тә тоныяҡ һәм көнбайыш райондарҙа май һәм ҡымыҙҙы баҫып тороп бешеү өсөн көбә етерлек бейек булған.



*Көбә һәм күнәк. Күгәрсен районы Бикбулат ауылы, 1981 йыл. Автор фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

## ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# СӘЛӘХТӘРҘЕҢ ДЕВИЗЫ:

## Тыныслыҡ. Изгелек. Кәрәклек.




**Бөйөк Еңеү байрамы алдынан 7 майҙа Йылайыр районының Сәләх ауылында "Ил яҙмышы - ирҙәр ҡулында" тигән сара булып үтте. Унда Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолованың, Йылайыр районы хакимиәте башлығы Борис Мелкоедовтың, яҙыусы, "Атайсал" гәзите баш мөхәррире Хәйҙәр Тапаҡовтың, Бөрйән, Ейәнсура, Хәйбулла районы вәкилдәре ҡатнашыуы байрамға йәм өҫтәне. Сараның республикабыҙҙа барған "Айыҡ ауыл" хәрәкәте сиктәрендә үтеүе иғтибарға лайыҡ, ни өсөн тигәндә, һәр йорттоң, ғаиләнең, ауылдың, һуңғы сиктә милләттең айыҡ тормош алып барыуы ул спиртлы эсемлектәрҙән тыйылыу ғына түгел, ә заманға ярашлы лайыҡлы йәшәүенә, донъя көтөүенә лә бәйле. Тормошонда мәғәнә менән тултырмаһаң, изге урын буш тормай, тигән һымаҡ, унда негатив күренештәр ҙә тулырға әҙер генә тора. Был йәһәттән Сәләх ауылы халҡының нисек итеп көн итеүе хаҡында гәзитебеҙҙең быйылғы 12-се һанында шағирә, журналист Айгөл Айытҡолованың "Эшебеҙ ҙә, ашыбыҙ ҙа ожмахҡа тиң ошо ерҙә" тигән мәҡәләһендә танышҡайныҡ. Был яҙмаһында автор сәләхтәрҙең лайыҡлы йәшәүгә, заманға ярашлы донъя көтөүгә нисек өлгәшеүҙәре хаҡында төпсөрләп яҙып сыҡты.**

**Шуға күрә күп һанлы фекерҙәрҙе ҡабатлап тормайынса, был ауыл халҡының башҡаларға өлгө булырлыҡ ынтыштарының сәбәптәренә бәйле ҡайһы бер дәлилдәремде генә килтереп үткем килә.**

**Ауылға 1927 йылда Сәләх Мортаев тигән кеше нигеҙ һалған. Сәләх һүҙенең ғәрәпсәнән өс төрлө аңлатмаһы бар: тыныслыҡ, изгелек, кәрәклек. Дәлилдәребеҙҙе ошо өс аңлатма юҫығында ҡарайыҡ:**



**А** **Тыныслыҡ.** Сәләх һәм солох - тамырҙаш һүҙҙәр. Тыныслыҡтың нигеҙе элек-электән ырыуҙар, илдәр араһында килешеү, солох төҙөүҙән башланған. Башҡорт йәмғәтселегендә иһә борон-борондан үҙ-ара килешеп йәшәү иң мөҡәддәс йола һаналып, бындай йәшәү рәүеше аҡһаҡалдар ҡоро тарафынан ҡүҙәтеүгә алынған. Атай-олатайҙарыбыҙ улдары өйләнһә, уларҙы үҙҙәренең ырыу биләмәһенең буш ятҡан урынына, мотлаҡ йылға буйына йорт һалып күсереп ултыртҡан. Һуңынан унын янына башҡалар ҙа килеп өй төҙөп, ауыл барлыҡҡа килгән.

Беҙҙең яҡта, мәҫәлән, был күренеште "ауылдарҙы бәпәйләтеү" тип атағандар. Һәр хәлдә, ауылдарҙың самаһыҙ ҙурайыуына юл ҡуйылмаған. Бында һүҙһеҙ ҙә аңлашылған сәбәп: мал өсөн көтөүлек һәм сабынлыҡ тарлығынан ҡотолоу тип тә атарға мөмкиндер.

Былар ни өсөн яҙамды? Сәләхтәрҙең татыулыҡта, тыныслыҡта бер ғаилә булып йәшәүҙәренең бер сәбәбе - ауылдарының бәләкәй булыуында. Әйтәйек, ике йөҙ йорттан торған ауыл өсөн йәшәү сығанағы булған уларҙағылай иркенлек хыял ғына булып ҡалыр ине. 42 йорттан ғына торған ауылда 162 кеше йәшәүе, 29 трактор, 27 еңел автомобиль берәмегә һаналыуы, 44 баланың балалар баҡсаһына һәм мәктәпкә барыуы тап ошо шарттарҙан барлыҡҡа килгән һөҙөмтә лә инде.

42 йорттан торған Сәләх ауылы өсөн ян-яғындағы көтөүлек һәм сабынлыҡ иркенлеге, емеш-еләккә бай урмандың булыуы күп кенә көн итеү мәсьәләләрен ыңғай хәл итеү мөмкинлеген барлыҡҡа килтергән. Атай-олатайҙарыбыҙ янынан-яңы бәләкәй ауылдарҙы нигеҙләп, ҡайһылай дөрөҫ эшләгән, тип әйтергә генә ҡала бында. Нимә генә тимә, халҡыбыҙҙың "Юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ ярaштыра" тигән икенсе бер мәҡәл-әйтеме лә тап ошо күренештең сағылышы инде. Тимәк, сәләхтәр республикабыҙҙың башҡа төбәктәрендә кешеләре күсеп китеү сәбәпле бөтөү, юғалыу сигенә еткән ауылдарҙы кире тергеҙеү өсөн дәүләт программаһына нигеҙ булырлыҡ йәшәү өлгөһө күрһәтә. Ауыл бер ғаилә булып, бер-береһенә изгелек ғәмәлдәре күрһәтеп йәшәй.

**Б** **Изгелек.** Икенсе дәлил, моғайын да, "Башҡаның башы ауыртмай" тигәнелер. Баш ауыртмаған урында татыулыҡ, татыулыҡ бар ерҙә тыныслыҡ та, изгелек тә була. Ауыл өсөн иң урын яңы мөмкинлектәр, йәшәү өсөн яңы импульс биреүен дә иҫәпкә алғанда,

Тик ошо ауылға ғына хас бер йоланың барлыҡҡа килеүендә лә шул изгелек сағылышы ята. Ул да булһа - иртәнсәк мал көтөүгә киткәндән һуң бар ауыл менән урамдағы асфальт өҫтөн һепереү. Ихатаны һепереү һәр кемдең шәхси эше һаналһа, урамды һепереүҙең ижтимағи әһәмиәте бар. Һәр кем үҙенең йорто алдындағы дөйөм ҡулланышта булған майҙанды таҙа тоторға тырыша икән, быны тик башҡалар, күршеләрең, ауылдаштарың өсөн изгелек эшләү тип кенә баһалап булалыр. Беҙ йәнә лә шуға ла шаһитбыҙ: бәләкәй ауылдарҙа әхлаҡ та, иман да, тимәк, тәртип тә ныҡлы һаҡлана.

**В** **Кәрәклек.** Ысынлап та, сәләхтәр бер-береһенә кәрәкле, терәк булып йәшәй белә. Бер-береһенә терәк, кәрәкле кешеләр ауылды ла ташлап китмәҫ, тыуған еренә сытырман йәбешеп йәшәр тип ышаны килә!

Мин бында бигерәк тә ир-аттың үҙ урынында үҙ бурыстарын үтәп йәшәүе хаҡында әйтеп үтер инем. Сараның "Ил яҙмышы - ирҙәр ҡулында" тип аталыуы ла юҡҡа ғына түгел. Башҡа күп кенә ауылдарҙан айырмалы рәүештә, Сәләх ир уҙамандары йылҡы ла үрсетә, ат та дағалай, көйәнтә, дуға бөгә, һунарсылыҡ, умартасылыҡ менән дә шөғөлләнә, тимерселәр ҙә, балта оҫталары ла ауылда етерлек. Был ауылдың тракторсылары һәр төрлө конкурстарҙа, "Байыҡ" бәйгеләрендә әллә ниндәй призлар алырлыҡ итеп һыңҡылдата баҫып бейеп тә ебәрә. Байрам көндө ауылдың өс ир-уҙаманының ялан тултырып бейеүе тиҙ арала социаль селтәрҙәр аша таралып, бер аҙна эсендә быҫаса күрелмәгән ҡарауҙар йыйырға ла өлгөрҙө. Һәр төрлө негатив мәғлүмәттәр менән, йәнәһе, алдынғылыҡты бирмәгән ҡайһы берәүҙәрҙең танауҙарына сыңҡылдата сиртте сәләхтәр. Беҙҙе ауылдың типһә тимер өҙәрҙәй утыҙлаған ир-егете гармун уйнап ҡаршы алды, бик һирәк осрай торған күренеш!

Был ауыл халҡы татыулыҡтары, тырышлыҡтары менән бер-береһенә генә түгел, ошо өлгөләре менән республикабыҙҙың башҡа ауылдарына ла, халҡыбыҙға ла бик кәрәк!

Әгәрҙә Туҡай ошо ауылды килеп күрһә, моғайын да, теге шиғырын ошолайыраҡ итеп башлап ебәргән булыр ине:

*Тап Йылайыр артында*
*Бар бер ауыл, Сәләх тиҙәр.*
*Тәбиғәте, кешеләре*
*Матур ҙа һуң һәләк тиҙәр.*
*Гәрсә унда тыумаһам да,*
*Бер барып киткән инем.*
*Ауыл халҡы ихласлығы*
*Хайрандар иткән ине...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*✓ Моғайын, юрмыйҙар уғыр сығышлы булып, ҡасандыр Көньяҡ Уралда һәм Урал аръяғында көн иткән. Ысынлап та, тарихи Башҡортостан ерлегендә байтаҡ ҡына юрма тамырлы топонимдар һаҡланып ҡалған.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЮРМЫЙҘАР - САЛ ТАРИХ ШАҺИТТАРЫ БЕҘ

**Күп һанлы башҡорт ырыуҙары araһында заманында юрмый (юрми) атамалы ырыу ҙа киң билдәле була. Батша Рәсәйендә ошо ырыу биләмәләре Ҡаҙан даруғаһының Юрмый олоҫон (Юрминская волость) хасил итә. Әлеге ваҡытта юрмый ырыуы биләгән ерҙәр Татарстандың Аҙнаҡай, Бөгөлмә, Әлмәт, Лениногорский, Башҡортостандың Баҡалы, Туймазы һәм Шаран райондарына ҡарай.**



Башҡорт юрмыйҙарының боронғо ата-бабалары хаҡында мәғлүмәттәр әллә ни күптән түгел, шулай ҙа сал тарих төпкөлдәрендә ошо ҡәүемдең боронғо мадъяр (венгр) һәм булғар (болгар) ҡәбиләләре менән ҡан-ҡәрҙәшлеге хаҡындағы фараздарға ерлек бар. Әммә үҙ тарихтарының иң боронғо этабында уҡ улар төрки ҡәүемдәренең береһе булараҡ иҫкә алына. Әммә ҡыпсаҡ, ҡуңрат, кирәйәт, ҡаңлы һәм башҡа башҡорт ырыуҙарының этник таксондары ҡаҙаҡ, нуғай, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк һәм башҡа төрки ҡәүемдәренең ырыу-ҡәбилә номенклатураһына ла инһә, юрмый этнонимы тик бер башҡорт халҡында ғына хәҙерге заманға тиклем һаҡланып килә.

Тарихсылар ошо ырыуҙың боронғо тамырҙарын халыҡтарҙың бөйөк күсеше заманында (IV быуаттың икенсе яртыһынан башлап) барлыҡҡа килгән этник берләшмәләрҙең береһе - ермихиондар менән бәйләй. Тикшеренеүселәр ошо этнонимдың ике өлөштән - "ерми" һәм "хион" атамаларынан хасил булыуын раҫлай. Хиониттар төрки ҡәүемдәренән булмаған, тип иҫәпләнә, әммә, уларҙың ерҙәрен төрки ҡәбиләләре биләгәндән һуң, ошо уҡ атама төркиҙәргә ҡарата ла ҡулланыла башлай. Византия тарихсыһы Феофан Византиец (VI быуаттың икенсе яртыһы) ошондай мәғлүмәт ҡалдырған: "Танаидтан (Дон йылғаһынан. - **Ред. иҫк.**) көнсығышта борон массагеттар тип аталған төркиҙәр йәшәй. Фарсылар уларҙы үҙ телдәрендә кермихиондар тип атай. Ошо ваҡытта улар Юстин батшаға бүләктәр һәм илселәр ебәрҙе һәм унан аварҙарҙы ҡабул итмәүен һораны (568 й.)". Венгр тарихсыһы һәм филологы Дьюла Моравчик кермихион атамаһының karmir hyon (ҡыҙыл хион) тигәндән килеп сығыуы хаҡында фараз итһә, немец тикшеренеүсеһе Йозеф Маркварт "керм" һүҙенең фарсы телендә "селәүсен" мәғәнәһен аңлатыуына иғтибар итә. Унынса, был атама аварҙарға ҡарата ҡулланылған: ҡытайҙар ҙа уларҙы "жуань- жуань", йәғни ниндәйҙер бөжәк исеме менән атаған була. Ю.А. Зуев та кермихион этнонимын йыланға табыныусы аварҙарҙың икенсе атамаһы, тип иҫәпләй, сөнки боронғо һинд-иранса "karm" һүҙе селәүсен йә иһә йылан мәғәнәһен белдерә. Тикшеренеүсе С.П. Толстов "керм"/"керман" һүҙенең ҡасаба, ҡала тигәнде аңлатып, Һырдаръя үҙәнендәге "һаҙлыҡ ҡаласыҡтары"на ҡарата ҡулланылыуын билдәләй. Көнсығыш тарихы буйынса күренекле белгес Ханс-Вильгельм Хауссиг "ерми" этнонимының протоболгар яҙмаларында һәм "Болгар хандары исемлегендә" булыуына иғтибар иткән. Икенсе бер немец тарихсыһы Франц Альтхейм ермихион атамаһының беренсе өлөшөндәге "ерми" исеменең "псевдоаварҙар"ҙы белдереүен раҫлай. Был тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә: VII быуатта Төньяҡ Кавказда йәшәүсе ерми/юрми исемле этник төркөмдәр хаҡында документаль сығанаҡтар табылған.

Башҡорт тарихсыһы С.И. Хәмиҙуллин боронғо ерми/юрми ҡәбиләләренең Көньяҡ Урал территорияһында уртаҡ башҡорт исеме аҫтында берҙәм этнос булып формалашҡан күп һанлы ҡәүемдәргә ҡушылыу тарихын асыҡлау маҡсатында түбәндәге фаразын тәҡдим итә. Моғайын, юрмыйҙар уғыр сығышлы булып, ҡасандыр Көньяҡ Уралда һәм Урал аръяғында көн иткән. Ысынлап та, тарихи Башҡортостан ерлегендә байтаҡ ҡына юрма тамырлы топонимдар һаҡланып ҡалған. Хәҙерге Башҡортостандың Белорет районында Юрматау һырты, Юрмаш һәм Кесе Юрмаш түбәләре, Өфө һәм Белорет райондарында Юрмаш гидронимы, Силәбе өлкәһендә шулай уҡ Юрматау һырты, Асҡын һәм Тәтешле райондарындағы Юрмияз топонимдары ошоно раҫлай.

"Халыҡтарҙың бөйөк күсеше" дәүерендә (IV-V бб.) юрмыйҙарҙың бабалары, билдәле бер тарихи-сәйәси сәбәптәр менән бәйле, фарсы телле хиондар менән союзға ингән булыуы мөмкин. Әгәр был ысынбарлыҡҡа тап килһә, тап ошо ваҡиғаларҙан һуң ермихион/кермихион этнонимы аҫтында берләшкән яңы ҡәүем хасил була. VI быуат урталарында күк төркиҙәр (төркөттәр) Авар (Жужань) ҡағанатын тар-мар итә. Байтаҡ ҡына дала халыҡтары көнбайыш тарафтарына табан күсенә башлай, уларҙың ҡыҫымы һөҙөмтәһендә ермихиондар Төньяҡ Кавказға барып етеп, шунда ерләшеп китә. Тап шул ваҡытта, атап әйткәндә, 563 йылда ермихион юлбашсылары Константинополгә илселек ебәреп, Византия менән союзға инергә теләк белдерә. Ә VII быуатта улар яңы ғына формалашҡан Бөйөк Булғария (Болгария) составына инә. Улар Ҡара һәм Азов диңгеҙҙәре янындағы, Дон йылғаһынан Кубангә тиклем йәйелеп ятҡан киң далаларҙы биләй. Әммә Кубрат хан дәүләте оҙаҡ йәшәмәй - ул хазарҙар һөжүменән һуң тарҡала. 670 йылда булғар урҙаһының ҙур бер өлөшө Аспарух хан етәкселегендә Дунай буйҙарына күсеп китә. Ерми ҡәүеменең күпселеге улар менән бергә ҡуҙғала. Булғарҙарҙың бер ни тиклеме, шулай уҡ суварҙар, Төньяҡ Кавказдан Урта Волга тарафтарына килеп урынлашып, бында һуңынан киң танылыу тапҡан Волга Булғарияһына нигеҙ һала. Ә был дәүләт составында юрмыйҙар иҫкә алынмай. Күрәһең, Дунай тарафтарына китмәгән юрмыйҙар туранан-тура боронғо ватандарына - Көньяҡ Уралға табанырaҡ килеп урынлашып, көнбайыш башҡорттары составына ҡушыла.

Тарихсы-этнолог, академик Р.Ғ. Кузеев юрмый һәм юрматы бабаларының тәү башҡорт этногенезында ҡатнашыусыларҙан булып, уларҙы шартлы рәүештә булғар-мадъяр төркөмөнә индерә. Ошо ғалимдың фекеренсә, Көньяҡ Уралда һәм уға яҡын урманлы-далалы ерҙәрҙә архаик замандарҙан бирле йәшәгән фин-уғырҙар менән боронғо башҡорттарҙың мәҙәниәттәре күп быуаттар дауамында бер-береһенә яҡыная бара, был улар араһындағы этник бәйләнештәр өсөн бик уңайлы шарттар тыуҙыра. "Юрматыларға һәм башҡа булғар-мадъяр ҡәбиләләренә ҡарата аҡрынлап "башҡорт" этнонимы ҡулланыла башлай, ул Волга-Яйыҡ арауығының көньяғына тиклемге бик ҙур майҙанда яугирлыҡ һәм хәүеф синонимына әйләнә. Боронғо башҡорт һәм булғар-мадъяр ҡәбиләләренең этник контакттары, ошо ике төркөм этнонимияһының һаҡланып ҡалған үҙенсәлегенә ҡарағанда, аҙ-аҙлап бер-береһенә үтеп инеү характерында булған", - тип яҙа ғалим. Бында булғар-мадъяр төшөнсәһе туранан-тура этностарҙы түгел, ә ошо заманда өҫтөнлөк иткән этносәйәси берләшмәне аңлата: булғар һәм мадъярҙарҙың этник составы төрлө эпохаларҙа төрлөсә булғанлығы билдәле.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

23 февралдә, төш ауышыуға, дошмандың ике пехота полкы һәм танкылары Ивановка ауылы яғынан атака башлай. 15-се гв. атлы дивизияһы командиры, гв. полковнигы И.Т. Чаленко тиҙ арала түңәрәк оборона ойоштора. Ике реактив установка, дошман өҫтөнә һуңғы залптарын биргәс, шартлатыла. Дошман һалдаттары ҡар өҫтөндә һибелеп ятҡан яугирҙарға тамам яҡынлашҡан бер мәлдә, комдив Чаленконың көслө тауышы һауаны яңғырата: "Все на прорыв!" И.Т. Чаленко һәм уның сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары, гв. полковнигы С.Т. Бабий, ҡылыстарын ҡындарынан һурып алып, һыбай килеш дошманға ташлана. Уларҙың артынан атлылар тулҡыны ҡалҡына. Йәйәүлеләр, атлыларҙан артта тороп ҡалып, дошман ҡулына эләгеү хәүефенән ҡотолоу маҡсатында, аттарҙың теҙгендәренә тотоноп алып, йән-фарман йәнәштән йүгерә. Дошман менән йөҙгә-йөҙ осрашҡан ҡыҙыл атлылар, һис бер ҡурҡыу һәм ҡаушау белмәй, фашистарҙы штыкка ала, ҡылыстары менән турай, баштарын йәнсетә һуға: уларҙың нәфрәт тулы күҙҙәрендә һәләк булып ҡалған иптәштәренең ҡонон ҡайтарыу ғына сағыла. Немец танкыларына, бронемашиналарына тиҙ тоҡана торған яғыулыҡ тултырылған шешәләр ташлана, дошман ошо тәңгәлдә юҡ ителә, ҡамауҙан сығыу өсөн алға юл асыла.

И.Т. Чаленко етәкләгән яугирҙар төркөмө Ивановка ауылы ситенән башланған Западная йырынына барып сыға. Бында уларға беҙҙең 16-сы гв. атлы дивизияһының берләштерелгән төркөмөнөң иҫән ҡалған яугирҙары, шулай уҡ полковник Р.И. Головановский төркөмө ҡушыла.

7-се гв. корпусының 15-се һәм 16-сы дивизиялары составынан иҫән ҡалған яугирҙарҙы И.Т. Чаленко өс айырым төркөмгә бүлә: беренсеһе - гв. капитаны С.С. Олейник командалығында 15-се дивизия һалдаттары; икенсеһе - гв. подполковнигы Г.Е. Фондеранцев етәкселегендә 16-сы дивизия һуғышсылары; өсөнсөһө - гв. майоры Ф.П. Музырь командалығында корпус штабының махсус подразделениеларынан төҙөлгән төркөм. Фронт һыҙығына тиклем бер-ике саҡрымлап ара ҡалған була. Әммә, яҡты саҡта дошман уты аҫтына эләгеп, бөтөнләйгә юҡ ителмәү маҡсатында, төнгө ҡараңғылыҡты файҙаланып, дошман биләгән позициялар аша үтергә ҡарар ителә. 24 февраль төнөндә беҙҙең яугирҙар тәүҙә Петровский ис. совхоз районына сыға, шунан Малониколаевка ауылынан алыҫ булмаған урында 3-сө гв. армияһының 14-се гв. уҡсы полкы биләгән позицияларҙа совет ғәскәрҙәренә ҡушыла.

7-се гв. корпусының 14-се гв. атлы дивизияһы (командиры - генерал-майор Николай Петрович Якунин), үҙаллы хәрәкәт итеп, дошмандың айырым төркөмдәренең ҡаршылығын еңеп, 24 февралдә кискә табан Елизаветовка ауылы районында фронт һыҙығын үтеп, 3-сө гв. армияһы частары биләгән позицияларға сыға.

Шанлы ла, ҡанлы ла рейд бына ошолай тамамлана.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Дүртенсе класҡа килгәндә математика уҡытыусыһы Ғәзелшин Мөхәмәт Ғатаулла улы тәүге дәрестә үк таҡтаға эре хәрефтәр менән "Белем менән аҡыл икеһе ике төшөнсә. Белем аҡылды алмаштыра алмай. Пифагор" тип яҙып ҡуйҙы.***



**Ағымдағы йылдың Рәсәй халыҡтарының Мәҙәни мираҫ, үҙебеҙҙә иһә Башҡорт мәҙәниәте һәм рухиәте йылы итеп иғлан ителеүенә бәйле әңгәмәләр циклын дауам итәбеҙ. Редакциябыҙ ҡунаҡтары - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы бүлек мөдире Зиннур Фәрит улы СӨЛӘЙМӘНОВ менән Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы САЛАМАТОВА.**

# БЕЛЕМҺЕҘ

## йәки Китап уҡымаған

**Ризаитдин Фәхретдиновтың шундай һүҙҙәре бар: "Әхлаҡ әҙәбиәт менән бер үк. Халыҡтың әҙәбиәте ниндәй булһа, уның әхлағы ла шулай булыр". Әҙәбиәт тә, мәҙәниәт тә әҙәптән башлана. Беҙҙә иһә, мәҙәниәт тураһында уның өҫкө өлөшөнә, сәхнәгә генә ҡарап фекер йөрөтөүселәр ҙә юҡ түгел. Шул уҡ ваҡытта халыҡ артисы исемен йөрөтөүселәр ҙә үҙ ғүмерендә бер китап та уҡымауы бар. Был хәлгә берәр аңлатма биреп буламы?**

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Әгәр ҙә белемһеҙ актер сәхнәгә сыға икән, уның ҡарашынан, ҡыланыштарынан уҡ мәҙәни кимәле үтәнән-үтә күренеп тора. Актер барлыҡ тышҡы сифаттары менән сағыу булып та, уның эске мәҙәниәте тура килмәһә, ул тамашаһы менән бәйләнеш булдырып, образды тыуҙыра алмай, уның образы аша әҫәр юҡҡа сыға тиғән һүҙ. Мин был хаҡта студенттарыма һәр ваҡыт әйтә киләм. Талантың эсендә, һис шикһеҙ, әҙәпте, әҙәбиәтте, тарихты үҙ эсенә алған мәҙәниәт ятыуы шарт. Сәхнәгә сыҡҡан актер драматургтың ошо әҫәрҙе яҙырға нимә мәжбүр иткәнен дә белеүе мөһим. Шул уҡ ваҡытта актер сәхнә асылғансыға тиклем үк булған ваҡиға күҙләгәнән дә сығып уйланырға тейеш. Белемһеҙ табип ауырыуҙы дауалай алмаған һымаҡ, белемһеҙ актер ҙа тамашаһы күнелен ауларлыҡ образ тыуҙыра алмай.

**Зиннур Фәрит улы:** "Беҙ элек шулай булдыҡ, уҡый, тырыша инек, хәҙерге йәштәр улай түгел", тиғән һымаҡ кәмһетеү бар ул. Әммә мин был фекер менән килешә алмайым. Сөнки һәр замандың үҙ йөҙө, үҙ ысулдары бар. Мәҫәлән, элек китаптан башҡа бер ниндәй ҙә сығанаҡ булмаған. Хәҙерге йәштәрҙәге мәғлүмәт базаһын элекке заман йәштәре төштәрендә лә күрә алмайҙыр. Бөгөн йәш кеше интернет аша Лондон китапханаһындағы китапты төп нөхсәһендә уҡый ала. Мин ысулдарҙың күп булыуы ла кешене биҙҙерәме икән, тип тә уйлап ҡуям. Элек, мәҫәлән, Баймаҡ кешеһенә Өфөләге китапханалағы бер китапты уҡыр өсөн баш ҡалаға килергә, китапханаға яҙылырға, китапҡа заказ бирергә, көтөргә кәрәк ине. Хәҙер иһә бер генә төймәгә баҫыу ҙа етә. Миненсә, эҙләнеү процесы кешене үҙгәртә булһа кәрәк. Шуға күрә элекке менән хәҙергене туранан-тура сағыштырыу дөрөҫ түгел. Беҙ хатта иртәгә нисек булырын да әйтә алмайбыҙ. Ҡайһы бер нәмәләр хәҙер көн эсендә, сәғәт арауығында үҙгәрә. Шундай ҡыҙыҡлы заманда йәшәйбеҙ. Ҡасандыр башҡорт һыбай йә арбала, санала йөрөгән, шунан паровоз һөйрәгән поездың килеүе ҙур эволюцияны тәшкил иткән. Ризаитдин Фәхретдинов "Әсмә" повесында ана шул поезд килгәндәге вокзалды тасуирлай. Бөгөн халҡыбыҙ алдында ла ҙур һынылыш тора, йәғни һанлы технологиялар шауҡымында телебеҙҙе, үҙебеҙҙе һаҡлап ҡала алабыҙмы?

**Бына һин, Зиннур Фәрит улы, Ризаитдин Фәхретдиновтың "Әсмә" әҫәрен сәхнәләштерҙең. Ул бөгөнгөнөң ниндәй проблемаһына ауаздаш? Әгәр ҙә шулай булмаһа, һин уны ҡуймаҫ та инең бит инде?**

**Зиннур Фәрит улы:** Был йәһәттән Ризаитдин Фәхретдинов бик ябай фекер әйтә. Ул: "Беҙҙең киләһе быуынды ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләй", - ти. Ризаитдин Фәхретдинов йәшәгән заманда ҡатын-ҡыҙҙың эшмәкәрлек даирәһе сикләнгән була, тик XX быуат башында ғына нескә зат тулы хоҡуҡлылыҡ яулап, майҙанға сыға башлай. Әле юҡҡа ғына матриархат мәле килеп етте, тип әйтмәйҙәр. Беҙ бер ауылда фольклор экспедицияһында булғанда ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәр бөтә барыуы хаҡында борсолоп сығыш яһағайны. Күп кенә ауыл хакимиәттәрендә булдыҡ, күбеһендә ауыл хакимиәте башлыҡтары булып ҡатын-ҡыҙ эшләүе лә күптә һөйләй. Әлегә ваҡытта ҡатын-ҡыҙ белемгә эйә булды, тик улар, Фәхретдинов әйткәнсә, яңы быуынды тәрбиәләй аламы? Бынаһы икенсе мәсьәлә.

**Ә һин, Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы, ошоғаса туплаған тәжрибәң менән хәҙерге көн күҙлегенән белем менән аҡылдың айырмаһын нимәлә күрәһең? Белемле кеше лә аҡыллы булмауы бармы?**

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Дүртенсе класҡа килгәндә беҙҙең мәктәптәге математика уҡытыусыһы Ғәзелшин Мөхәмәт Ғатаулла улы тәүге дәрестә үк таҡтаға эре хәрефтәр менән "Белем менән аҡыл икеһе ике төшөнсә. Белем аҡылды алмаштыра алмай. Пифагор" тип яҙып ҡуйҙы. Математиканан уҡытыусыҙ ул ошонан башланы. Утыҙ йыл үтеп китһә лә, һаман да иҫемдә ошо хәл.



Миңә ҡалһа, бөгөн кешелә белем күберәк, аҡыл әҙерәк. Эйе, белемле кеше лә аҡыллы булмауы бар. Шул уҡ ваҡытта аҡыллы кеше үҙенең белемһеҙлеген йәшерә ала.

**Зиннур Фәрит улы:** Аҡылдың эсендә аң да бар. Ысынлап та, белемле булыу аҡыллы булыу менән тиң түгел. Аҡыл йәшәйеш принциптары менән бәйле. Белем китапханаға йыйылған китаптар һымаҡ. Аҡыллы кеше белемен файҙалана беләләр. Яңыраҡ "Табор уходит в небо" фильмындағы бер өҙөктө интернетта күреп ҡалдым. Унда аҡыллы кешенең икеләнә белеүе хаҡында фекер әйтелә. Булған белемен аҡылға әйләндерә алған кеше инде оло шәхес булып үҫешә.

**XVIII быуат башҡорто менән хәҙерге көн башҡорто ниmәһе менән айырыла тип уйлайһығыҙ?**

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Айырылмай. Сөнки ул быуатта ла, бөгөн дә мәҙәниәттең нимә икәнлеген аңлаған шәхестәр булған, улар әле лә бар. Әлбиттә, заман үҙгәргән һәм уға ҡарап кешелектең йәшәйеше генә үҙгәргән. Беҙ һәр ваҡыт үткән быуатта йәшәүселәрҙе белемһеҙ, артта ҡалған итеп күрергә тырышабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, беҙ бөгөн ағымдағы йылыбыҙҙы Мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан итеп, "Нимә ул мәҙәниәт?" тиғән һорауға яуап эҙләйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта 1932 йылда, теп-тәүәл 90 йыл элек беҙҙә Милли мәҙәниәт институты төҙөлгән. Унда башҡорт фольклоры, башҡорт әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы бүлектәре асыла. Унда Ленинградта уҡып ҡайтҡан Мөхтәр Байымов тәүге директор булып эшләп өлгөрә, унан Ғабдулла Амантай институты етәкләй. Институтта эшләгән Ғәзиз Әлмөхәмәтов йәйҙәрен экспедицияға сығып китеп, Башҡортостан районлары буйлап халыҡ йырҙарын йыйып йөрөй. Киң билдәле тюрколог Николай Дмитриев институт эшенә килеп ҡушыла һәм "Башҡорт теленең грамматикаһы" тиғән китабын яҙа. Ошоларҙан сығып, теге заман башҡорттары артта ҡалған тип фекер йөрөтөп буламы? Үткәндәрҙе беҙ ниндәйҙер сикләүҙәр аша ҡарарға тейеш түгелбеҙ, сөнки тарих - ул үткәндәр тураһында түгел, тарих ул киләсәк тураһында.

**Зиннур Фәрит улы:** Миңә ҡалһа, кешенең асылы, ысынлап та, үҙгәрмәй. Әммә тәрлә әйбергә тәрләсә ҡараш тыуа, ҡараш үҙгәрә. Әле ун йыл элек кенә бер төшөнсәгә бөтөнләй башҡаса ҡараш ине, хәҙер ул бөтөнләй икенсе төрлө.

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Ҡараш, әлбиттә, үҙгәрә, әммә мәҙәни форма һаҡланып ҡала.

**Зиннур Фәрит улы:** Беҙ, нисектер, формулалар, ҡалыптар менән фекерләргә өйрәнгәнбеҙ һымаҡ. Ысынлап та, ниндәй булған икән XVIII быуаттағы кеше? Шулай уҡ балаларын һөйгәндер, йәне көйгәндер, беҙҙең һымаҡ үк яратҡандыр инде. Донъяға ҡарашы икенсе булғандыр ул.

**Шәйхзмәт Сибаевты кантон итеп Әбйәлил районының Рәхмәт ауылына ебәрәләр. Ҡатыны Фатима Атайсалда (хәҙерге Иҫке Сибай) тороп ҡала. Был ике ауыл араһын хәҙерге заманда машина менән ике сәғәттә үтеп була. Ә Шәйхзмәт Фатимаһын һағынып:**

**Һандуғастар һайрар,**
**ай, ер түгел,**
**Кәкүк тә генә саҡырыр**
**ер түгел.**
**Илама ла, Фатимам,**
**ай, илама,**
**Йүгереп кенә ҡайтыр ҙа**
**ер түгел,**

**тип йыр сығара. Элекке кеше беҙгә ҡарағанда хислерәк булманымы икән?**

**Зиннур Фәрит улы:** Хислерәк булғандыр. Хәҙерге заманда беҙ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә әллә күпме мәғлүмәтте ҡабул итеп, эшкәртеп өлгөрәбеҙ. Ә ул ваҡытта бөгөнгөләй коммуникация булмағас, кешенең ваҡыты күп, ауылдан ауылға мәғлүмәт килеп еткәнсе бихисап ваҡыт үткән. Хәҙер иһә майҙанға башҡа төрләрәк хистәр килеп сыға һымаҡ. Элекке кешенең күнеле бай, күнеле бай икән ул мәҙәнилерәк тә булған. Хәҙер иһә күнел ярлылығы кешелек сифаттарын юғалтыуға ла алып килә. Улай тиһәң, ул ваҡытта йәшәмәгәс, сағыштырыуы ла ҡыйын.

**Хәҙерге сәнғәттә, театрҙа, кинола башҡорт характеры нисек сағылыш табырға тейеш тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Зиннур Фәрит улы:** Миңә был тема ҡыҙыҡ. Мәҫәлән, грузин юморы тиҙәр, йәһүд анекдоты, әрмән радиоһы, ҡыҫҡаһы, һәр бер милләт нимәһе менәндер айырылып тора. Миңә башҡорт менән татарҙың бесән эшләүе хаҡындағы лаҡап оҡшай. Башҡорт әйтә (яйлап әйтергә кәрәк, һүҙып): "Бараһың, сабаһың, бакуйҙарын әйләндерәһең, күтәремгә һалаһың, күбәләйһең, шунан алып ҡайтаһың". Татар былай тип тиҙ генә әйтә икән: "Аның нәрсәсе бар инде, барасың да, чабасың да, өясең дә, җыясың да куясың". Бына бит, бер үк эш эшләй һымаҡ, тик үҙ нескәлеге бар, тизлеге.

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Минең өс туған һеңлемдең ире - кейәүем бар. Бөгөнгө башҡорт тигәндә шул кейәүем күҙ алдыма килә. Өфөнөң уртаһында дүрт бүлмәле шәп фатирҙа йәшәй ул. Үҙе сығышы менән Әбйәлил районынан. Дүрт ҡыҙҙары бар, барыһы ла 20-се башҡорт мәктәбендә

***Һәр замандың үҙ йөҙө, үҙ ысулдары бар. Мәҫәлән, элек китаптан башҡа бер ниндәй ҙә сығанаҡ булмаған. Хәҙерге йәштәрҙәге мәғлүмәт базаһын элекке заман йәштәре төштәрендә лә күрә алмайҙыр. Бөгөн йәш кеше интернет аша Лондон китапханаһындағы китапты төп нөхсәһендә уҡый ала. Мин ысулдарҙың күп булыуы ла кешене биҙҙерәме икән, тип тә уйлап ҡуям. Элек, мәҫәлән, Баймаҡ кешеһенә Өфөләге китапханалағы бер китапты уҡыр өсөн баш ҡалаға килергә, китапханаға яҙылырға, китапҡа заказ бирергә, көтөргә кәрәк ине. Хәҙер иһә бер генә төймәгә баҫыу ҙа етә. Миненсә, эҙләнеү процесы кешене үҙгәртә булһа кәрәк. Шуға күрә элекке менән хәҙергене туранан-тура сағыштырыу дөрөҫ түгел. Беҙ хатта иртәгә нисек булырын да әйтә алмайбыҙ. Ҡайһы бер нәмәләр хәҙер көн эсендә, сәғәт арауығында үҙгәрә. Шундай ҡыҙыҡлы заманда йәшәйбеҙ.***

# АҠЫЛЛЫМЫ, мәҙәниәтлеме?

**Ул быуатта ла, бөгөн дә мәҙәниәттең нимә икәнлеген аңлаған шәхестәр булған, улар әле лә бар. Әлбиттә, заман үҙгәргән һәм уға ҡарап кешелектең йәшәйеше генә үҙгәргән. Беҙ һәр ваҡыт үткән быуатта йәшәүселәрҙе белемһеҙ, артта ҡалған итеп күрергә тырышабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Мәсәлән, беҙ бөгөн ағымдағы йылыбыҙҙы Мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан итеп, "Нимә ул мәҙәниәт?" тигән һорауға яуап эҙләйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта 1932 йылда, теп-теүәл 90 йыл элек беҙҙә Милли мәҙәниәт институты төҙөлгән. Унда башҡорт фольклоры, башҡорт әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы бүлектәре асыла. Унда Ленинградта уҡып ҡайтҡан Мөхтәр Байымов тәүге директор булып эшләп өлгөрә, унан Ғабдулла Амантай институтты етәкләй. Институтта эшләгән Ғәзиз Әлмөхәмәтов йөйҙәрен экспедицияға сығып китеп, Башҡортостан райондары буйлап халыҡ йырҙарын йыйып йөрөй. Ошоларҙан сығып, теге заман башҡорттары артта ҡалған тип фекер йөрөтөп буламы?**

уҡыйҙар. Өйҙә балалар тик башҡортса ғына һөйләшә. Кейәүем ҡара таңдан сығып китә, үҙенең шәхси бизнесы бар, һеңлем ҡыҙҙар һәм өй мәшәҡәттәре менән булыша. Әллә күпме ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар аша үтһә лә, кейәүем ныҡышмалы рәүештә алға бара. Минең өсөн башҡорт характеры ошо кейәүем һынландыра. Әгәр ҙә милләтебеҙҙең ун проценты уның һымаҡ булһа, киләсәгебеҙ яҡты буласаҡ.

**Зиннур Фәрит улы:** Кейәүеңдең унышлы кеше булыуы күп йәһәттән һеңлеңдән дә тора, Гөлсәсәк.

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Мин бына үҙем кемгә кейәүгә сығырға тигәндә иң беренсе нәүбәттә атайыма лайыҡлы кейәү тигән талапты тәүге планға ҡуйҙым. Уның атайым ише уҡымышлы, тормошта ныҡлы ҡарашы булған кеше булыуы мөһим ине. Ул "Минең кейәүем бит ул!" тип ғорурланып йәшәргә тейеш тип уйланым. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, атайым вафат булғанда мин кейәүҙә түгел инем, шулай ҙа атай хаҡы - мәңгелек. Әгәр ҙә бөгөн мин бик лайыҡлы кеше менән донъя көтәм, балалар үҫтерәм икән, уның нигеҙе - атай алдындағы яуаплылыҡ. Мөхәббәт мәсьәләһенә килгәндә, был хис йәшәй-йәшәй барлыҡҡа килеүсән.

**Зиннур Фәрит улы:** "Әсмә"не ҡараған кешегә Шәмсиә инәй, бәлки, "Золушка"лағы үгәй әсәй һымаҡ булып тойолор. Шәмсиә Әсмәне эшләтергә, ниндәйҙер ҡарт бабайға кейәүгә бирергә тырыша. Әсмә быға ҡырҡа ҡаршы һымаҡ, ул уҡырға теләй. Шәмсиә һаман үҙ һүҙен һүҙ итергә ынтыла. Был саҡта тамаша залында ултырыусылар Әсмә яғында була. Шәмсиәнең ҡарты ла Әсмәне йәлләй, уны ҡарт кешегә кейәүгә бирергә ҡаршы һымаҡ. Әммә аҙаҡҡа табан фекерҙәр үҙгәрә, сөнки Әсмә Шәмсиә инәйҙең тормошта ныҡлы аяҡҡа баҫырға өйрәткәнен аңлап өлгөрә. Ҡарттың иһә уны йәлләүе, бәлки, шул уны көткән һәләкәткә алып килгәндер ҙә. Был йүнәлештәге ике-өс ҡарашты бергә тоташтырырға тырыштым да инде спектаклдә, килеп сыҡтымы, уныһы тамашасы хөкөмөндә.

**▸ "Иң мөһим сәнғәт төрө булып беҙҙең өсөн кино тора", тигән Владимир Ленин. Ысынлап та, иң тәүҙә һүҙ булған, шунан шиғыр, йыр, проза, драматургия, театр барлыҡҡа килгән. Аҙаҡтан ошоларҙың барыһының да синтезы булып кино сәнғәте формалашҡан. Киләсәктә йәшәй торған милләттең киноһы ла булырға тейеш, улай ғына ла түгел, милләттең рухи үҫеше һөҙөмтәһе лә ул кино. Башҡорт киноһының киләсәгән нисек күҙаллайһығыҙ? Ни өсөн һаман да Салауат батырыбыҙ тураһында кино төшөрә алмайбыҙ?**

**Зиннур Фәрит улы:** Мин киноны рухи үҫештең иң юғары һөҙөмтәһе тип һанамайым. Сөнки кинонан һуң тағы ла нимәләр буласаҡ. Бәлки, ул виртуаль ысынбарлыҡтыр, виртуаль донъялыр. Унда кинолағы һымаҡ ниндәй мөхиттә, сюжетта теләһәң, шунда йәшәй алаһын. Ул сағында кино сәнғәт булараҡ бөтөнләй тарихта тороп ҡалыуы бар. Әбына театрға килгәндә инде, ул һәр ваҡыт йәшәйәсәк. Сөнки кинолағы ваҡиғалар таҫмаға яҙылып, унда ҡатып ҡала, ә театрҙа ваҡиғалар әле һәм хәҙер бара. Тамашасы менән артист араһында бер нәмә лә юҡ, тере энергия, тере тауыш. Миненсә, театр, бәлки, һүҙҙән дә алдараҡ барлыҡҡа килгәндер. Сөнки театр һинең йәшәйешеңде символдар аша тамашасыға еткереү ысулы.

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Әле профессиональ театр ныҡлап аяҡҡа баҫмаған саҡта агитпьесалар тыуған. Агитпьеса нимә ул? Ул халыҡтың әлеге йәшәйешен сәхнәлә күрһәтеү. Удар бишйыллыҡтар башланған саҡта был төр пьесалар шул темаға арнала. Шулай уҡ халыҡтың фекере лә туранан-тура сәхнәлә яңғыраған. Мин дә сәхнә сәнғәтенең иң юғары нөктәһе театр тип һанайым һәм ул театр халыҡ менән дәүләтте бәйләп торған урын. Илдә барған ваҡиғалар ҙа театр аша күрһәтелеп, халыҡҡа еткерелһә, ә халыҡтың талаптары театр аша хөкүмәткә еткерелә.

**Зиннур Фәрит улы:** Дөрөҫ, театр - бөгөнгә көн тураһында, ниндәй генә тарихи спектакль булмаһын, ул барыбер бөгөнгә ҡайыра.

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Мостай Кәримдең "Театр - ул мөхәббәт хаҡында күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеү, ә кино мөхәббәт хаҡында телефон аша һөйләшеү", тигән һүҙҙәре бында тап килеп тора.

**▸ Ғәзим ағай Шафиҡов "Урал батыр" пьсаһын яҙҙы, мин уны башҡортсаға аударҙым. Академда Рөстәм Хәкимов ҡуйырға тейеш. Шунда мәрхүм актер Хәмит Шәмсетдинов бик ҡыҙыҡлы идея тәҡдим итте. Уның күҙаллауынса, был әҫәрҙе ҡуйыр өсөн бер ниндәй ҙә декорация кәрәкмәй. Ни бары сәхнәнең алғы планында үлсәү йәғни бизмән тора. Артҡы планда ваҡиғалар бара һәм Урал менән Шүлгән ваҡыт-ваҡыты менән бизмәндең ике яғына килеп яҭа. Изгелек еңә башлаһа, Урал, яуызлыҡ еңә башлаһа, Шүлгән аҫҡа баҫа. Һеҙгә шундай һорау: әгәр ҙә кино төшөрөү мөмкинлеге килеп сыҡһа, һеҙ "Урал батыр"ҙы нисек төшөрөр инегеҙ?**

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Бынан бер өс йыл элек Булат Йосопов менән был турала һөйләшкәйнек. Фильм төшөрөү тураһында һүҙ сыҡҡас, мин уға бының өсөн белемем дә, эпосты аңларлыҡ аҡылым да, кимәлем дә етерлек булмауын әйттем. Мин ул кимәлгә ҡасан барып етеремде лә әле белмәйем. Уны үҙ ғүмеремдә аңлап етә алырмынмы икән? Мин Булат Тимербай улына эпосты иң ныҡ аңлаған ғалим Закирйән Әминев менән һөйләшергә тәҡдим иттем. "Урал батыр"ҙы аңларлыҡ, аңлатырлыҡ берҙән-бер кеше тип мин уны һанайым. Башҡа ғалимдар минә үпкәләмәһендәр. Эпосты мин беләм, аңлайым, тип әйткән кешеләр ҙә күп, әммә улар теҡсын ғына белә. "Көрьән"де уҡып тәфсирләрлек минең белемем дә юҡ, шуға мин дини китабыбыҙҙы уҡыған хәлдә лә, уны аңлатырға баҙнат итмәйем. "Урал батыр"ҙа минең өсөн "Көрьән" кеүек үк ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Хәҙерге ваҡытта "Урал батыр"ҙы яттан һөйләү конкурстары үтә. Бик хуп. Ләкин уҡыусылар "Урал батыр"ҙы яттан һөйләмәй, ә "Урал батыр" эпосының теҡсын ғына яттан һөйләй, тип ҡабул итәм. Текст һәм эпостың асылы. Ошо ике төшөнсә араһында ҙур айырма бар.

**Зиннур Фәрит улы:** Теҡсын ятлаған кеше барыбер ҙә үҙенсә эпосты аңларға тырыша инде ул. Ул кеше шул юлға баҫҡан, барып етәме-юҡмы, уныһы икенсе мәсьәлә. Бәлки, эпосты асыҡларға ынтылған кеше башҡа серҙәрҙең дә асылына төшөнә алалыр, ул да насар түгел. "Урал батыр"ҙы сәхнәлә, кинола нисек ҡуйылырға тейешлеген әйтә алмайым. Сөнки Урал батырға ҡылыс тоттороп, ҡаршыһына Ҡәһҡәһәне, дейеүҙәрҙе ҡуйһаң, ул йәнһүрәткә әйләнә. Нимә эшләһәң дә, ул әкиәт була. Бәлки, ағалы-ҡустылы Урал менән Шүлгәндең, атаһы менән әсәһенең уларға мөнәсәбәтен үҙәккә ҡуйып, нимәләр эшләргә булалыр.

**▸ Дин тотмаған кеше мәҙәни була аламы?**

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Дини юлда булып та, уларҙың ҡылыҡтары менән ризалашмаған кешеләрем бар. Шуға күрә дин тотоу ғына мәҙәни булыуҙы аңлатмайҙыр. Икенсенән, тотош сикләүҙәрҙән генә торған динде беҙгә өлгө итеп биргәләр, ә бит дин ул, тәү сиратта, ғилем. Мин, мәсәлән, Морат Лоҡманов менән бер сәғәт ултырып һөйләшһәм, бер тоҡ китап уҡығандай булам. "Улайтма, былайтма" тип гел тыйырға тырышҡан дин юлындағы кеше мәҙәниме икән? Әйтеүе ҡыйын. Дин тыйыу ғына түгел, ул йәнендә ял иттерә торған тәғлимәт. Әгәр ҙә кешенең йөне тыныс икән, ул насар ҡылыҡтарҙы тыйған өсөн түгел, аңлы рәүештә эшләмәй.

**▸ Совет осоронда кешеләр араһында бик йылы иптәштәрсә мөнәсәбәт бар ине. Коммунистик идеология емерелеп, дин ереклеге килгәйне, киреһенсә, кешеләр төрлө дини секталарға бүленеп, улар араһында дошманлыҡ башланды. Совет осоронда ысын дини мөнәсәбәт коммунизм төҙөүсенең әхлаҡи кодексы нормаһына йәшеренеп йәшәнеме икән? Нисек уйлайһығыҙ?**

**Зиннур Фәрит улы:** Мин был хаҡта әйтә алмайым, бәлки, дошманлыҡ динде үҙ файҙаһына ҡулланған кешеләрҙән торалыр. Миңә Ислам динендә шуныһы оҡшай: беҙ Хоҙайҙы нисек кенә күҙ алдына килтерһәк тә, Уны күрә алмайбыҙ. Әммә беҙ Уның изгелеккә илткән юлын яҡшы күрәбеҙ. Динде ҡорал итеп алыусылар үҙҙәрен мулла тип атарға ла мөмкиндәр, тик улар динде башҡаларға һөжүм итер өсөн ҡуллана башлаһа, дошманлыҡ барлыҡҡа киләлер. Атеизм осоронан һуң дин беҙҙең тормошҡа төрлө тарафтарға барып, дини ғилем алған кешеләр аша төрлө секталар булып килеп инде. Дошманлыҡтың нигеҙе лә ошондалыр. Ә, әйтәйек, революцияға тиклем, асылда, беҙҙә бер йүнәлеш - тәриҡәт юлы өҫтөнлөк иткән. Бер риүәйәт бар. Сиркәү янында бер малай илап ултырған. Янына Хоҙай Тәғәлә килеп:

- Нимә булды, ниңә илайһың? - тип һораған.

- Сиркәүгә индермәйҙәр, - тигән малай.

- Илама, унда һине генә түгел, мине лә индермәйҙәр, - тип тынысландырған уны Хоҙай Тәғәлә.

**Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы:** Үҙен башҡалар алдында аҡыллыраҡ итеп күрһәтергә тырышыу ҙа бар ҡайһы бер дин юлында булыусыларҙа. Динде файҙаланып, башҡаларҙы үҙенең артынан эйәртергә маташыусылар ҙа, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күбәйҙе. Минең ҡартәсәйем мәрхүмә биш намаҙ уҡыны, тик бер ваҡытта ла беҙҙе тыйманы, әрләмәне, хатта беҙ уның намаҙ уҡығанын да күрмәй ҡала инек. "Мин хәҙер намаҙ уҡыйым. Барығыҙ ҙа шым ғына ултырағыҙ", тигән тыйыу ҙа, иғлан да булманы. Һүҙһеҙ генә аңлап тора инек. Беҙгә дөрөҫ аңлатыуҙың башҡа әмәлдәрен тапты ул. Был күренеште лә юғары мәҙәнилек, тип аңларға кәрәк.



**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Полкты йөҙҙәргә бүлеп әйҙәй башланылар. Шуға Ыласынов йөҙ баштарына шыбырҙаны - кемдең ҡайҙа барғанын бер-берегеҙгә белдерә йөрөгөҙ. Берәрегеҙҙә хәүеф һиҙелә икән, икенсегеҙ ярҙамға барып етерлек булһын.*





# ПАРИЖДА

**Ғәлим ХИСАМОВ**

**(Романдан өҙөктәр)**

***Быйыл Рәсәй Федерацияһы 1812 йылдағы Ватан һуғышына 210 йыл тулыуҙы билдәләйәсәк. Шул айҡанлы яҙыусыбыҙ Ғәлим Хисамов "Француз яуы" тип исемләнгән роман яҙҙы. Иғтибарығыҙға ошо әҫәрҙән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.***

Усман йырға бөтөн зарын, ҡәһәрен һәм ҡайғыһын һалып йырланы, тамағынан моң, күҙҙәренән йәш түгелде. Уны шып-шым тыңлаған кешеләрҙең дә күҙҙәренән йәш аҡты. Йыр инде бөттө тигәндә генә яр аҫтынан бер аҡсарлаҡ көйөлөп осоп сыҡты ла Усмандың атының башына тейә яҙып, ялт өҫкә шыйҙы. Бындайҙы көтмәгән ат ҡапыл үрәпсене. Усман эйәр ҡашына саҡ тотоноп өлгөрҙө. Ярҙа ятҡан киң таш өҫтөндә торған кешеләр арт аяҡтарына баҫҡан аттан ялтанып, артҡа тартылды. Ә иң ситтә торған кисәге ҡатын, күрәһең, тайғаҡ ташҡа саҡ эләгеп торғандыр инде, аяғын күтәргән ыңғайы ярҙан ысҡынып та китте, һыуға шап барып та төштө. Усман шуны ғына көткән тиерһең, аттың башы аша һыуға һикерҙе. Ҡатын ни булғанын аңлап өлгөргәнсе, Усмандың ҡулына килеп тә инде. Һыу йылы, әммә тәрән ине. Ҡатын йөҙә белмәй ине, ахырыһы. Аяҡ, ҡулы менән шап та шоп килергә тотондо. Шул ыңғай Усманды ла батырыу яғына тартты. Һыуҙан башын сығарған бер мәлдә Усман һыҙғырып ебәрҙе. Уның аты аҡрын ғына ярҙан һыуға төшөп китте һәм хужаһы һыуҙы шаптырлатҡан арала, Усмандың янына килеп етте. Ир кеше бер ҡулы менән ҡатынды ҡосаҡланы, икенсеһе менән эйәр айылына тотоноп өлгөрҙө. Ат аҡрын ғына яр ҡатыһына баҫты һәм хужаһы менән бикәне ергә алып сыҡты. Кейемдәренән һыу ағып торған көйө Усман ҡатынды эйәргә күтәреп ултыртты ла тылмасҡа:

- Ҡайҙа алып барайым? - тине.

Тегенеһе ҡатынға текәлде. Уныһы "Алға" тип ҡулы менән ишараланы. Усман аттың башындағы нуҡтаны тотоп алға атланы. Был икәү китте лә барҙы, ҡалғандар тороп ҡалды.

Хәйернас йоҡлар алдынан Усман йәшәгән урынға килде. Әммә Усман юҡ ине әле. Бер аҙҙан ғына килеп инде. Кейеме ҡоро, таҙа. Ауыҙы йырыҡ.

- Исеме Франсуа, - тине ул.

Хәйернас һүҙҙең кем тураһында икәнлеген шунда уҡ аңланы.

- Атың ҡайҙа һуң?

- Һарайға индерҙем. Көндөҙ малдың тамағы һис булмағанса һыйланды. Өйҙәрендә ат ашарлыҡ бер нәмә лә тапмағас, өҫтәлдәге икмәкте бирҙек. Өйҙәрендә дүртәү торалар, дүртеһе лә ҡатын-ҡыҙ. Әсәһе өс ҡыҙы менән. Аталары үлгән.

- Быларҙы ҡайҙан белеп бөттөң һуң һин? Французса белмәйһең дә инде.

- Нимә тиҙәр әле: нужа ҡалас ашата, тиме? Кәрәкһә, ым телен дә "һә" тигәнсе өйрәнәһең икән.

Усман менән Франсуа көн һайын күреште. Тәүҙә йырлаштылар. Дөрөҫөрәге, Усман йырланы, Франсуа тыңланы. Икеме-өсмө көндән Франсуа егеткә ҡушылып китте һәм айырым да йырлай башланы. Шулай итеп Франсуа егеттең телен йыр аша өйрәнде тиһәң дә була.

Ике-өс аҙна үтеүгә йәштәр бер-береһенең телендә арлы-бирле һупалай башланы. Усман хеҙмәт иткән полкты Францияның икенсе ҡалаһына күсерергә фарман килгәс, йәштәр башта ни эшләргә белмәй шаҡ ҡатты. Ярар, ошондай мәлдә ярҙамға дуҫ-иш килә. Усмандың ҡалтырап төшкәнен күргәс, Хәйернас:

- Бар, полк башлығы менән, полк муллаһы менән һөйләш. Берәр кәңәш бирерҙәр,- тине.

Ысынлап та яҡшы булды әйткәне. Полк командиры:

- Өйлән, - тине. - Бер һин генә түгел эҫенешеп киткән парҙар. Полк егеттәренән ике кеше немкаға, берәү болгарға өйләнде. Һин дүртенсе булаһың.

Мулла:

- Тик кәләшең мосолман булырға тейеш. Шул саҡта ғына никах уҡыйым.

- Мин уны нисек мосолман итәйем?

- Мосолман булырға ризалашһа, Ислам диненә күсерәбеҙ. Кәләшең менән һөйләш.

Ул көндө Франсуаның башына яңылыҡтар ямғыр урынына яуҙы. Усман тәүҙә үҙҙәрен икенсе ҡалаға күсерәсәктәрен әйтте. Франсуа ҡото осоп, башын ҡосаҡлап, аптырап ултырғайны, Усман икенсе хәбәрен әйтте:

- Һин минең менән бергә китергә ризалашыр инеңме?

- Мин ризалашыр инем дә ул. Тик әрме хеҙмәтендәге иргә эйәреп китеп булмай ҙа инде.

- Була. Беҙҙә башҡортта бик һирәк булһа ла рөхсәт бирәләр. Тик бының өсөн ир менән ҡатын никахлашҡан булырға тейеш. Һин миңә кәләш булырға ризалашыр инеңме?

- Мин ризалашыр инем дә ул, алыусыһы булһа.

- Мин алыр инем, тик һинең мосолман булыуың шарты менән. Ислам диненә күс һуң.

- Нисек итеп?

- Беҙҙең мулла һине Исламға индерә.

- Ярар.

Шулай итеп, Усман менән Франсуа, дөрөҫөрәге Фәйрүзә, шул кисте никах уҡытты һәм полк йәшәгән ҡаҙарманың бер мөйөшөндә сымылдыҡ артында ҡауыштылар. Йыр йырлашыу менән танышҡан йәштәр ирле-ҡатынлы рәүештә хеҙмәтен дауам итте.

## Ҡайтыу юлы

Бер үк юл барғанда өс көнлөк булһа, ҡайтҡанда ике көнлөккә әүерелә. Уның сәбәбен юл йөрөгән кеше яҡшы белә. Барыу юлы - сиге юҡ һымаҡ тойолған өйҙәге әҙерлек менән башлана, шуға һуҙыла. Әммә ҡайтыр юл да бик оҙон булып китә ҡай саҡта. Парижға Беренсе, Икенсе, Дүртенсе, Бишенсе,Туғыҙынсы Башҡорт полктары, Беренсе типтәр һәм Беренсе Ырымбур полкы ингәйне. Тәүге көндәр ҡыҫҡа-ҡыҫҡа һуғыш, ҡыйралып бөтмәгән наполеонсыларҙы эҙәрлекләү, торопятып йөрөр урынды әҙерләү, артабан етәкселәр ҡушҡан һәр төрлө йомошто башҡарыу һәм Париж менән танышыу иң күп ваҡытты алды. Ҡайһы ғына илде, ниндәй генә телдә һөйләшкән ғәскәрҙе алма, уларҙың етәкселәре араһында иң ныҡ таралған һәм йөҙәр йылдар буйына үҙгәрмәй торған бер ҡағиҙә бар: әгәр үҙеңдең ҡоралды көстәреңдең теләһә ниндәй алышҡа ла әҙер булыуын теләйһең икән, уны туҡтауһыҙ эшкә - хәрби хеҙмәткә ек. Парижды алған императорҙар һәм король, маршал һәм генералдар шул талапты башынан сығарманы. Ғәскәри хеҙмәттәр көн дә, көн дә ниндәйҙер эшкә ҡушылды. Әле генә үткән һуғышта ҡыйралған юл һәм күперҙәр, торлаҡ йорттар һәм мәктәптәр - күп йорттар емертеүселәрҙең үҙҙәренең ҡулы менән йүнәтелде. Был эшкә барыһы ла: Рәсәй яугирҙары ла, Прусс менән Герман һуғышсылары ла, Италия, Бельгия һәм башҡа ил вәкилдәре лә йәлеп ителде. Был хәл байтаҡҡа һуҙылып китте. Уның үҙ сәбәптәре бар ине.

Башҡорт полктарының икәүһе генә Парижда ҡалды, ҡалған өсөһө төрлө бүтән ҡалаларға күсерелеп бөттө. Штабта был хәлде бик ябай аңлаттылар:

- Беренсе һәм Икенсе полктар 1811 йылдан бирле хеҙмәттә. Шуға уларҙың илгә тура ҡайтырға хоҡуҡтары бар. Ә бүтәндәр 1812 йылдың аҙағында ғына алышҡа инде. Шуға улар һуңғараҡ ҡайтасаҡ.

Әммә Беренсе һәм Икенсе полктар ҙа шунда уҡ юлға сыға алманы. Полктарға Үҙәк штабтан әллә ниндәй тикшереүселәр килеп тулды. Полк етәксеһенән башлап һәр яугирҙы энәһенән ебенә тиклем тигәндәй тикшерҙеләр. Нисек һуғышҡан, ҡасан ҡайҙа нимә һөйләп йөрөгән, офицер булһа, янында ниндәй яугирҙарҙы яҡынлатҡан, кемен ситләткән? Ситтән ҡарағанда, булыр-булмаҫ кеүек һорау менән теңкәләрен ҡоротоп бөттөләр.

Иртәгә ҡайтырға юлға сығабыҙ, тигән көндө майор Ыласынов хушлаша була штабҡа Ҡудашевты күрергә китте. Әммә полковникты таба алманы. Уның ҡайҙалығын берәү ҙә белмәй булып сыҡты. Аптыраған Ыласынов полкка кире китергә тора ине, генерал Платов тап булды.

- Һин Ҡудашевты эҙләп йөрөйһөңмө, - тип текләште ул майорға.

- Эйе, иртәгә ҡайтабыҙ, хушлашып китәйем, тигәйнем.

- Һин уны эҙләмә, башыңа бәлә генә алырһың. - Шунан шыбырлауға тигәндәй күсеп,- Испанияға беҙҙең илселеккә ебәрҙеләр уны.

- Бәй, ул испан телен түгел, французды ла белмәй ҙә инде.

- Ҡайһы берҙә телде белмәгәнең яҡшы. Юғиһә, теле бигерәк оҙонайып киткән, тиҙәр. Бәхетенән императорҙың киң күңелле сағына тура килгән. Юҡһа, уны атырға тәҡдим иткәндәр, император аттырмаған, илселеккә ебәрткән, ти.

Платовтың йәшерен-боҫорон һөйләгәнен Ыласынов төшөнөп тә бөтмәне. Шулай ҙа бер нәмәне яҡшы аңланы: һуғыш ваҡытындағы тәртибең тыныс тормошҡа ярап та бөтмәй икән.

* * *

Башҡорт полктарын бер юлы ҡайтармаҫҡа булғандарын майор Ыласынов шундуҡ төшөндө. Тәүҙә Беренсе һәм Икенсе полк юлға бергә ҡуҙғалғайнылар. Әммә бара торғас, төрлө һылтау табып, Икенсе полкты тотҡарланылар. Ә Ыласыновты, киреһенсә, ашыҡтырҙылар. Юл буш саҡта тиҙерәк алға китегеҙ. Польшаны уҙғас, Беренсе полкка тәғәйен юлды Мәскәүгә еткерә яҙып һалдылар. Ә Икенсе полк урауҙан китте. Бынфһы ғына ла аҙ: полкты йөҙҙәргә бүлеп әйҙәй башланылар. Шуға Ыласынов йөҙ баштарына шыбырҙаны - кемдең ҡайҙа барғанын бер-берегеҙгә белдерә йөрөгөҙ. Берәрегеҙҙә хәүеф һиҙелә икән, икенсегеҙ ярҙамға барып етерлек булһын. Беренсе полк Ырымбурға имен-аман ҡайтты. Икенсе полк та урауыраҡ юлдан булһа ла тәүгеһенән ныҡ артҡа ҡалмайынса, үҙ кантонына етте.

Ҡаһым хеҙмәт иткән полк Владимир гөбөрнәһе аша китте. Йөҙҙәргә бүлгеләнеп барған һыбайлыларҙың беренсе өлөшө ҙур булмаған ауыл янында төн ҡунырға туҡтаны. Йәй бит, көндөҙ генә түгел, төндәрен дә йылы. Шуға яугирҙарҙың күбеһе ҡыуыш ҡороп мәшәҡәтләнгеһе килмәйенсә, баш аҫтына эйәр һалып, өҫтөнә сәкмән йә еңел юрған ябынып, йоҡларға булды. Бөгөн кис тамаҡҡа яҡшы ғына бешереп, һыйланып алырға самаланылар. Ҡайта торған юлдың яртыһынан күбеһе артта ҡалды инде. Көндән-көн өй яҡыная бара. Шуға күңел дә күтәренке.

Ашнаҡсы, ауылдың иң ситке өйөнә инеп, тамаҡҡа бешерер өсөн ҡайҙан һыу алырға икәнлеген белеште.

- Һеҙҙең кеүек яугирҙы көтәүәлләп бында бер кеше йөрөй ине. Шул һыуҙы үҙем килтерешермен, тине. Хәҙер табып, яныңыҙға ебәрермен,- тине ауылдың ире.

Ысынлап та, оҙаҡламай бер кеше ашнаҡсыны ҡыуып етте. Күренеп тора, был ауыл кешеһе түгел. Кейеме лә ҡаласа. Бындағыса "о" менән түгел, "а" өнөнә баҫым яһап һөйләшә.

- Һиңә һыу кәрәкме ни?- тип килеп етте.

- Эйе, - тине ашнаҡсы. - Ауылдыҡыларҙан һорап тотонмаһаң, әллә ниндәй һыу алыуың бар.

- Уныһы дөрөҫ. Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән Хоҙай. Үҙегеҙ ниндәй полктан? Ҡайһы яҡҡа бараһығыҙ?

- Беҙ башҡорт яугирҙары. Ырымбур гөбөрнәһенә ҡайтабыҙ.

- Командирығыҙ кем?

- Бында беҙҙең йөҙ башы ғына. Ҡаһым Мырҙашев. Палкауай бүтән йөҙ менән ҡуша йөрөй.

- Ярар. Ҡайҙа күнәк-сиңәктәрең? Һыу алып бирешәйем дә китәйем. Минең дә бараһы ерем бар.

**(Дауамы. Башы 17-18-се һандарҙа).**

*✓ Алкаштар, ғәҙәттә, нисек баш төҙәтеүе тураһында гәп һата, төкөрөгөндө йоторлоҡ итеп һөйләй. Тимәк, иҫереүҙең, йәғни, ваҡытлыса кәйефләнеүҙең һөҙөмтәһе - баш төҙәтеү.*



АФАРИН!

**Май айының оҙайлы ял көндәренең береһендә бик матур байрамда ҡатнашырға насип булды. Был сарала ҡатнашҡан һәр кемдең күңеле бөтәйеп, офоктары киңәйеп, рухтары нығынып, зиһендәре асылып, дәрт-илһам алып ҡайтҡанына шик юҡ. Унда Федоровка башҡорттарын районда ғына түгел, ә тотош республикала танытҡан Яңы Яуыш ауылының "Айгүзәл" халыҡ ансамбле үҙенең егерме йыллығын билдәләне.**

# "АЙГҮЗӘЛ"ДӘРҘӘ...

## тамырҙарыбыҙҙы һаҡлар көс бар

Федоровка районында алты ғына башҡорт ауылы бар. Аҙ булһа ла, улар халҡы төбәктә берҙәмлеге, дәртлелеге менән айырылып тора. Ял көнө, өстәүенә, ауыл ерендә яҙғы мәшәҡәттәрҙең осо-ҡырыйы күренмәгән ҡыҙыу осор булыуына ҡарамаҫтан, халыҡ ансамбленең юбилей шатлығын уртаҡлашырға ҙур теләк менән килеүҙәре, Бала Сытырман ауылы мәҙәниәт йортоноң тамаша залы шығырым тулы булыуы шуны иҫбатлай ҙа инде.






Эйе, бер һүҙле, уртаҡ уйлы Федоровка районы башҡорттары. Байрамда ла, эштә лә бергә улар. Сыуаш, мордва халҡы күпләп йәшәгән районда башҡорт мәҙәниәтен, йолаларын һаҡлап, донъяның матурлығына һоҡланып, балалар үҫтереп, күпләп мал тотоп, бер-береһенә ярҙам итеп, бынамын тигән итеп йәшәйҙәр. Уларҙың берҙәмлегенә, ихласлығына, уңғанлығына ныҡышмаллығына хайран булырлыҡ. Был хаҡта "Айгүзәл"дәрҙе юбилей менән ҡотларға килгән район хакимиәте башлығы Венер Насретдинов та, мәҙәниәт бүлеге начальнигы Булат Сиражетдинов та билдәләп үтте.

Был көндә "Айгүзәл" халыҡ коллективына, уның етәкселәре Тәзкирә һәм Ишморат Маликовтарға ла маҡтау һүҙҙәре күп яңғыраны. Баш ҡаланан саҡырылған ҡунаҡтар - "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, билдәле журналистар Сәрүәр Сурина, Гөлдәриә Йосопова, мәғариф ветераны Рәйфә Вәлиева үҙ сығыштарында репертуарында башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тормош-көнкүрешен күрһәткән йолалар урын алған коллективҡа һоҡланыуын һәм ғорурланыуын йәшермәне.

Ансамбль етәксеһе Ишморат Фәйзулла улы егерме йыл эсендә коллектив үҫешенә тос өлөшөн индергән әүҙем ағзаларға, шулай уҡ Федоровка районы башҡорттарына ғына хас ауыҙ-тел ижадын һаҡлаған оло быуын вәкилдәре Рауза Хәбибуллина, Гөлсирә Сәлимйәнова, Фәүзиә Маликова, Фәйрүзә Ғүмәрова, Мөхтәрәмә Дәүләтбаева, Ғәфүрә Хәбибуллина, Миңлевафа Маликова, Нәфисә Баяҙголова, Флүрә Дәүләтбирҙина, Мөнирә Маликоваларға рәхмәт әйтте. Халыҡ ансамбленең репертуарындағы йолалар - тап уларҙан бөртөкләп йыйып алынған мәҙәни мираҫ өлгөләре, тарихи ҡомартҡылар булыуы билдәләнде.

Мәктәп директоры Ишморат Маликов ойошторған был коллективтың нигеҙен бөгөн уҡытыусылар, мәктәп, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, мәғариф, ауыл хужалығы хеҙмәт ветерандары, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы әүҙем ағзалары тәшкил итә. "Айгүзәл"дәрһеҙ районда бер сара ла үтмәй тиерлек. Бынан тыш, конкурстарҙа ҡатнашырға ла форсат табалар. Төрлө йылдарҙа "Ашҡаҙар таңдары", "Таҡмаҡ әйтеш - 2010" республика конкурсында лауреат исемен яулағандар. Былтыр Бөтә донъя фольклориадаға арналған "Халыҡ уйындары" төбәк-ара фольклор программалары интернет-конкурсында 125 коллектив араһында иң юғары баһаға - Гран-приға лайыҡ булғандар. Ырымбур ҡалаһында башҡорт тирмәһен асыу сараһының, Салауат, Торатау йыйындарының, IV Бөтә донъя фольклориадаһының, Башҡортостандың 100 йыллығына арналған концерттың да уртаһында булған улар. Былар - һуңғы йылдарҙа ҡатнашҡан саралар ғына, ә ике тиҫтә йылда улар һаны бихисап.

Айгүзәлдәр халҡыбыҙҙың милли байрамдарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалыуҙы, уларҙы йәш быуынға еткереүҙе изге бурысы һанай. Ауылда клуб юҡ тип тә, йортта эш күп тип тә тормайҙар. Аҙнаһына ике тапҡыр, кәрәк булһа, йышыраҡ та мәктәпкә йыйылып, репетиция эшләйҙәр, яңы йолалар өйрәнәләр. Уларҙың башланғысы менән ауылда тәрбиәүи саралар ойоштоpола, онотола барған йолалар тергеҙелә, дини байрамдар үткәрелә. Сценарийҙы Тәзкирә Маликова үҙе яҙа.

Йола тотҡан хур булмаҫ, ти халыҡ. Ысынлап та, милләтебеҙҙең рухи хазинаһын тәшкил иткән, онотола барған йолаларҙы тергеҙеү, йәш быуынға күрһәтеү, ә шулай ҙа иң мөһиме, уларҙы дөрөҫ атҡарып сығыу - айгүзәлдәрҙең төп маҡсаты. Ағинәйҙәр, мәктәп, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, "Ынйылар" башҡорт балалар фольклор коллективы менән берлектә эшләйҙәр. Ауылда, районда үткән барлыҡ сараларҙың башында халыҡты әйҙәгән, ойошторған көс булып торалар.

Юбилей сараһында күрһәтелгән "Сәсеүгә сығыу йолаһы", йәш баланы 40 көнгә тиклем һаҡлауға бәйле "Корамалы-бетеүле", "Ҡурсаҡ менән имләү" йолаларының нигеҙендә халҡыбыҙҙың йәшәйеш ҡанундары, кешеләрҙең, ғаилә ағзаларының үҙ-ара мөнәсәбәте урын алғанлығына иғтибар итмәгән кеше булмағандыр. "Айгүзәл"дәр йылдың һәр миҙгеле, айы, көнө билдәле бер ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итеүен, кешенең һәр ҡылығы, эше, хатта уй-ниәттәре лә элек-электән йола-ҡанундарға яраҡлаштырылыуын күрһәтергә тырышты. Йола атҡарғанда көйләнә, һөйләнә торған теҙмә һәм сәсмә телмәр өлгөләренең барыһын да улар, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, урындағы инәйҙәрҙән, оло быуын вәкилдәренән яҙып алғандар. Шуға ла бөтә сығыштар ҙа сәхнә йәки театр күренеше кеүек түгел, ә ысын һымаҡ ҡабул ителде.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ТӘҮБӘ

# ЭСКЕЛЕККӘ ҠАРШЫ ТҮГЕЛ,

## айыҡлыҡ өсөн көрәшеү кәрәк



**Эскең киләме, тип һорайҙар. Әлбиттә, эскем килә. Иҫергең киләме, тип һорамайҙар. Һораһалар, әлбиттә, эйе, тиер инем.**

Эйе, эскем килә. Тереһыуға бәрәбәр саф шишмә һыуы эскем килә. Иҫергем килә. Спиртһыҙ эсемлек эсеп иҫергем килә. Әммә был тормошта, ҡыҙғаныска ҡаршы, улай мөмкин түгел. Әҙәм балаһы ни өсөн эсә? Әлбиттә, иҫерер өсөн эсә. Әле бер кемдең дә араҡыны тәмләп эскәнен күргәнем юҡ. Сытырайып-сытырайып, укшыр хәлгә етеп эсәләр Иблис шыйыҡсаһын. Иҫерер өсөн йоталар. Әммә бер эскесенең дә икенсе көнөнә: "Белһәң ине, миңә кисә ни тиклем рәхәт булғанын!" - тип һөйләгәнен ишеткәнем юҡ. Алкаштар, ғәҙәттә, нисек баш төҙәтеүе тураһында гәп һата, төкөрөгөндө йоторлоҡ итеп һөйләй. Тимәк, иҫереүҙең, йәғни, ваҡытлыса кәйефләнеүҙең һөҙөмтәһе - баш төҙәтеү. Михаил Жванецкий әйтмешләй, үҙенең нимә теләгәнен белгән берҙән-бер кеше - бахмурҙан ауырыусы.

Самаһын белеп эскәндәр бар, самаһынан арттырып дөмөккәндәр бар. Һәр икеһе лә иҫерер өсөн эсә. Мәҙәниле эсергә кәрәк, ти, ҡай берәүҙәр, самаһын бел, ти, икенселәр. Былай уйлау, шулай аҡыл өйрәтергә маташыу аҡланыуға бәрәбәр. Үҙ-үҙеңде аҡларға тырышыу - яуапһыҙлыҡтың бер төрө генә. Иң рәхәте - аҡыл һатыу. Күпмегә алдың, шул хаҡҡа һаттың - ғәгтләп, көсләп тағыу кәрәкмәй. Урыҫса әйткәндә, "За сколько купил, за столько продал".

Үҙ ғүмеремдә ауыҙына бер тамсы ла спирт йотмағандарҙың эскелеккә ҡаршы көрәшеүен бөтөнләй аңламайым. Эйе, дөрөҫ юлда улар. Изге эш башҡаралар кеүек хатта. Әммә... Нисек аңлатырға? Бындай ҡыланыштан ике йөҙлөлөк еҫе килә. Үҙең аңламағанды башҡаларға аңлатырға тырышыу һымағыраҡ. Зинһар өсөн, был, "Башта эсегеҙ, шунан көрәш юлына баҫығыҙ", тип өндәй, тип яңылыш аңлап ҡуймағыҙ. Былай ҙа күп көрәшәбеҙ!

Бер карикатура иҫкә төшә. Атаһы малайының ыштанын һыпырып, ҡайыш менән асыҡ осаһына һуғып тора. Тыйылғанды үтәмәгән өсөн язаға тарттыра. Ә улы шул мәлдә атаһының ике аяғындағы ботинка бауҙарын бер-береһенә ҡуша бәйләп тора. Йәнәһе, ысҡынһа, атаһы ҡыуып тота алмаясаҡ. Пётр батша осоронда эскелек менән артыҡ мауыҡҡандарға ете килолыҡ миҙал аҫып ҡарағандар, Брежнев осоронда көсләп дауалап маташтылар, Горбачев виноград баҡсаларын ҡырҡтырып ҡараны. Һөҙөмтәһе? Бер быуын үҙ эсыулы менән көрәшә, киләһе быуын яңыларын уйлап табырға тырыша, ә баяғы ыштанһыҙ малай һаман атаһын тышап маташа.

Бәлки, бөтөнләй көрәшмәҫ кәрәктер, тыймаҫ кәрәктер? Тыйылған емеш тыйған һайын тәмлерәк күренә бит ул. Етмәһә, максималист үҫмерҙәр протест йөҙөнән өлкән быуын нәсихәтен боҙорға тырышыусан була - бер бөгөн йәшәмәйбеҙ, быныһы ғына аңлашыла, әлбиттә. Әммә былай ҙа ярамай. Шулай булғас, ни эшләргә һуң? Нобель премияһы лауреаты, монах-ҡатын Тереза-Әсә нимә тигән әле? "Мин бер ваҡытта ла һуғышҡа ҡаршы хәрәкәткә ҡушылмаясаҡмын... тыныслыҡ өсөн хәрәкәт барлыҡҡа килгәс, саҡырырһығыҙ", - тигән ул. Эскелеккә ҡаршы көрәшкәнсе, бәлки, айыҡ тормош өсөн шарттар булдырыу тураһында уйларға кәрәктер, ә? Әйткәндәй, өлөгә "Айыҡ ауыл" конкурсына нигеҙ һалыусы егеттәр ҙә был сараны айыҡлыҡ өсөн көрәш сараһы тип башлағайны бит. Йәштәр араһында айыҡ йәшәү рәүешен пропагандалау, уларҙы спортҡа йәлеп итеү, матур йыйындар үткәреү кеүек үтә файҙалы, һөҙөмтәле саралар, бөтә илдә билдәле медицина ғалимдарының лекция-уҡыуҙарын ойоштороуҙары хәтерҙә һаҡланып ҡалған. Аҙаҡ был конкурсты эскелеккә ҡаршы көрәш сараһына әйләндерҙеләр...

"Изгелектең сере шунда: башта ул көсһеҙ, аҙаҡ еңелмәслек була. Ә яуызлыҡ башта көслө, аҙаҡ көсһеҙгә әйләнә", - был һүҙҙәрҙе лә Тереза-Әсә әйткән. Ошоноң менән тәүбәм тамамдыр... Башымдан үткәнде, күңелем менән кисергәнде яҙырға, уйҙарымды уртаҡлашырға тырыштым. Маҡтау кәрәкмәй, хөкөм итһәгеҙ - ихтыярығыҙҙа. Минең өсөн иң мөһиме - уртаҡлашыу ине.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӨҘ ЙӘШКӘСӘ...

Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Ғалимдар көн һайын йогурт ашау ҡан баҫымы күтәрелеү сирен булдырмаҫҡа ярҙам итә, тип билдәләй. Йогурт составындағы кальций ҡан тамырҙарының һығылмалылығын һаҡларға ярҙам итә. Британияның диетологтар ассоциацияһы ағзаһы Рик Миллер аныҡлап китеүенсә, кальций ҡан тамырҙары һәм мускул системаһын нормала тоторға ярҙам итә. Быны тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Көнөнә 120 грамм йогурт ашаған кешеләрҙә был сирҙәр барлыҡҡа килеү хәүефе 31 процентҡа түбәнәйгән. Әммә белгестәр иҫкәртеүенсә, аҙыҡ өҫтәмәһе булараҡ тәҡдим ителгән кальций кире тәьҫир итә - артерияларҙың стенаһы ҡалыная.

■ Италия ғалимдары борон күҙҙәрҙе дауалай торған дарыуға юлыға. Ул Тоскана ярҙары буйында батҡан боронғо карапта табылған. MedPortal хәбәр итеүенсә, был сауҙа судноһы Урта диңгеҙҙең Көнсығыш өлөшөнән быяла, амфора, яҡтыртҡыстар, аҡ ҡурғаш һәм бронза һауыттар тейәп ҡайтып килгәнендә Италия ярҙары буйында б.э тиклем яҡынса 130 йыл элек батҡан. Карап 1974 йылда табылған. Археологик эштәр барышында серегән ағас йәшниктәр эсендә һыуҙан зыян күрмәгән дарыуҙар һәм медицина ҡорамалдары ла осрай. Цинк берләшмәләренән, хайуан майҙарынан, крахмал һәм ҡарағай ылыҫынан торған дарыуҙарҙың составын, формаһын тикшереп ҡарағандан һуң, ғалимдар уларҙың күҙ ауырыуҙарынан ҡулланылыуын асыҡлаған - уларҙы борон ауырыу күҙҙең ҡабағына һалып дауалағандар.

■ Цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационы юғары күләмдәге флавонондарҙан торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флавонондар - флавоноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флавоноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

■ Ҡала ығы-зығыһы, юлдарҙағы тығындар, йәмәғәт транспортындағы халыҡ, эштәге стресс һәр кемдең нервыларын ҡаҡшатыу һәләтенә эйә. Әгәр ҙә эшкә һәләтлелегегеҙ кәмеһә, йоҡлай алмаһағыҙ, күңелегеҙҙе хәүеф тойғоһо биләп алһа, спорт менән шөғөлләнә башлағыҙ, тип кәңәш итә табиптар. Шулай уҡ башҡа төрлө физик әүҙемлек тә шатлыҡ һәм бәхет гормондары - эндорфиндарҙың кимәле күтәрелеүгә килтерә. Бынан һуң шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, насар уйҙар шунда уҡ таралаҫаҡ.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# САБЫЙҘАРЫБЫҘ...

## уйнай-уйнай үҫһен!



**Заман үҙгәрә, шуның менән беҙ ҙә үҙгәрәбеҙ, хатта һәр замандың балалары ла төрлө була икән. Сабыйҙар ҡайһы заманда ла шул уҡ була инде, тиерһегеҙ. Миңә ҡалһа - юҡ. Мәҫәлән, хәҙер биш йәшлек балалар ҙа компьютерҙа "иркен йөҙә", техниканы беҙҙән былайыраҡ яҡшы белә. Башҡаса булмайҙыр ҙа, улар бит тыуғандан алып ошо цифрлы мөхиттә үҫә, шуға яраҡлаша, был уларға яңылыҡ түгел.**

Ауылға ҡайтҡанда ла айырма һиҙгәнем бар: ҡышҡыһын беҙ бала саҡта шып-шыма булып ятҡан Мәсет тауы тыныс ҡына ҡалын ҡөрт аҫтында ята (минә ҡалһа, уға ла ҡүнелһеҙ һымаҡ) - бер кем сана шыумай. Урам шаулатып "Ун ике таяҡ", "Аҡ-тирәк, күк-тирәк" уйнаусыларҙы ла һирәк күрәм. Балалар юҡ икән, тип уйламағыҙ - бар улар, тик өйҙә йәнһүрәт ҡарай, компьютерҙа ултыра, тетрис уйнай...

Сабыйҙар хәрәкәтләнеп, нимәләр уйлап сығарып уйнарға тейеш. Уйнаған саҡта улар төрлө яҡлап: физик, аҡыл, эмоциональ кимәлдә үҫешә. Тағы ла дөрөҫ һайланған уйындар сабыйҙарҙы әхлаҡ, әҙәп, хеҙмәт яғынан тәрбиәләүгә лә булышлыҡ итә. Улар уйнай-уйнай тормоштоң төрлө ауырлыҡтарына бирешмәҫкә, уңышһыҙлыҡтар алдында ебеп төшмәҫкә, еңелгән осраҡта үҙен тота белергә, иптәштәре менән аралашырға, бәйләнеш булдырырға өйрәнә. Уйын ваҡытында баланың телмәре, фекерләү ҡәүәһе, зиһене үҫешә, сөнки бала был саҡта күптәр менән бәйләнешкә инә, яңынан-яңы һүҙҙәр ишетә, үҙе лә уларҙы ҡулланырға тырыша. Ата-әсәләр сабыйҙары менән өйҙә лә, юлда ла, сәфәр ваҡытында ла уйнай ала. Мин бөгөн үҙебеҙ бала саҡта йорт эсендә уйнап үҫкән уйындарҙы иҫкә төшөрөп, уларҙы һеҙгә лә тәҡдим итергә булдым.

**"Бутыр-бутыр бутҡа бешкән".** Бишалты айҙан алып ике йәшкәсә балаларҙы алға ултыртып:

*Бутыр-бутыр бутҡа бешкән,*
*Уртаһына май төшкән.*
*Уны алайым тигәнсе,*
*Биш бармағы ла бешкән,* - тип һамаҡларға, унан бәпестең һәр бармағын бөгөп, быныһы - атайға, быныһы - әсәйгә, быныһы - өләсәйгә, быныһы - олатайға, быныһы - һиңә, тип һанап сығырға. Был кескәй сабыйҙар өсөн бик файҙалы уйын, уның күңеле күтәрелә, кәйефе яҡшыра. Ғалимдар фекеренсә, ошондай уйындар бармаҡтарҙың ваҡ моторикаһын үҫтереп кенә ҡалмай, ә баш мейеһенең эшсәнлеген әүҙемләштерә һәм баланың хәтере, иғтибары, ишетеү, күреү һәләте лә яҡшыра.

**"Айыу, бүре юҡ икән...".** Был уйынды өйҙә бер нисә бала йыйылғанда уйнатырға мөмкин. Бер-ике йәшлектәрен дә бәләкәй тип ситтә ҡалдырмағыҙ, улар шулай бергә уйнарға өйрәнә, отоп ала. Бер бала иҙәндә айыу булып, битен ҡаплап йоманланып ята. Ҡалғандары еләк йыйырға килә һәм айыуҙы уратып йырлай: "Айыу, бүре юҡ икән, бында еләк күп икән...". "Айыу" йоҡлаған булып шым ғына ята һәм ҡапыл тороп, уларҙы бәстыра башлай. Кемеһен тота - шул айыу була. Был уйын шул яғы менән файҙалы: балалар йүгереп, хәрәкәтләнеп кенә ҡалмай, уяу, сос, етеҙ булырға ла өйрәнә.

**"Һәпәләк".** Бер баланың күҙен бәйләйҙәр. Ҡалғандары уны уратып шым ғына ҡаса. Күҙе бәйләнгән бала уларҙы ҡыуып тоторға тейеш. Кемде тотһа - шуның күҙе бәйләнә. Был уйынды уйнағанда ишетеү һәләте үҫешә, кескәйҙәр күҙе бәйле килеш һәр ҡыштырлауҙы ишетеп, шул яҡҡа йүнәлергә, ҡасыусыларҙы тота алырға тейеш. Шулай уҡ бала иғтибарлы, зирәк булырға өйрәнә, уның хәрәкәт координацияһы үҫешә.

**"Йәшенмәк".** Бер йәш тулмаҫ элек үк бәләкәсегеҙ менән был уйынды уйнай башлағыҙ. Әҙәләп табыуы еңел булған урынға йәшенегеҙ һәм балаға үҙегеҙҙе табырға ҡушығыҙ. Башта атаһы менән әҙәләп өйрәнһен. Һуңынан уйындың айышына төшөнөп алғас, үҙе үк ҡыҙыҡһынып уйнай башлаясаҡ. Бәләкәскә еңелерәк булһын өсөн йәшенеп торғанда "Кә-күк" тип тауыш бирегеҙ. Бала тауыш буйынса һеҙҙе эҙләп табасаҡ. Үҫә барған һайын уйынды ла ҡатмарлаштырығыҙ. Был уйын да кескәйҙәрҙә иғтибарлылыҡ, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаттарын тәрбиәләй, ишетеү һәләтен үҫтерә.

**"Алма, груша, сейә, туп..."** Был уйынды бер нисә бала менән, шулай уҡ өйҙә бәпесегеҙ менән үҙегеҙ генә булғанда ла уйнай алаһығыҙ. Башҡалар теҙелеп ултыра, алып барыусы алмашлап уларҙың һәр береһенә туп бирә. Биргән саҡта ниндәй ҙә булһа һүҙ әйтергә тейеш. Ашай торған нәмә булһа - тупты тоторға, ашарға ярамағаны булһа - кире ҡағырға кәрәк. Был уйын да бик әһәмиәтле, ул кескәйҙәрҙең етеҙлеген, сослоғон, иғтибарын арттыра.

**"Әшкәк, бәшкәк, ҡара һыйыр һоп!".** Был әсәйемдәр бала саҡта уйнап үҫкән уйын. Беҙ ҙә уны уйнап үҫтек, хәҙер ҡыҙым уйнай. Уйындарҙың быуындан-быуынға күсә килеүе - ҡалай матур күренеш! Был уйын балалар ныҡ ҡүҙғып киткәндә, уларҙы ултыртып ҡына уйнатып алыу өсөн ҡулай. Түңәрәккә теҙелешеп ултыралар, ҡулдарын йоҙроҡлап башбармаҡтарын күтәрәләр һәм бер-береһенекен тотоп, бағана яһайҙар ҙа, һелкетеп: "Әшкәк-бәшкәк, ҡара һыйыр һоп!" - тиҙәр. Шунан һуң барыһы ла иренен ҡымтып, шым ғына ултыра. Төрләсә ҡыланып, бер-берендә көлдөртергә тырышырға мөмкин. Кем беренсе көлә йәки тауыш сығара, шунан: "Кемдең өйөнә ҡунаҡҡа барҙың?" - тип һорайҙар. Ул берәй ғаиләнең исемен атай. Шул ғаиләлә күпме кеше йәшәй, уның маңлайына шунсама сиртәләр. Был уйын сабыр, түҙем булырға өйрәтә, шулай уҡ кескәйҙәрҙең хәтерен нығыта.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Баламды яңынан тәрбиәләү мөмкинлеге булһа, уның менән уйнар ҙа уйнар, уйнар ҙа уйнар инем, тигән бер ғалим. Хаҡ һүҙҙәр. Ысынлап та, беҙ үҫеп килгән сабыйыбыҙҙың иң мөһим, иң матур осорон донъя артынан ҡыуып, ваҡыт етмәүгә һылтанып, мәшәҡәттәрҙән арып, уға тейешле иғтибар бүлмәй уҙғарып ебәрәбеҙ. Сабыйҙар мотлаҡ йүгереп, сабып, хәрәкәтләнеп, тәкмәс атып уйнарға тейеш - был уларҙың тәбиғи хәле. Буш ваҡытығыҙҙа сабыйығыҙ менән бергә булырға, компьютер артында түгел, ә хәрәкәтләнеп, аралашып, төрлө уйындар уйнарға тырышығыҙ. Был бик мөһим, һеҙ бит шул рәүештә сабыйығыҙҙы тәрбиәләйһегеҙ, үҫтерәһегеҙ, буласаҡ шәхескә нигеҙ ҡораһығыҙ! Уларҙы төрлө уйындарға ылыҡтырығыҙ, әле бит уларҙың уйнап туймаҫ саҡтары!**

Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА.

БАҠСА

**Йәмғәт фекерен өйрәнеү һөҙөмтәләренә ҡарағанда, быйыл күптәр баҡсасылыҡ менән шөғөлләнә башлаясаҡ. Ял итеү өсөн генә тотолған дачалар һәм үҫтерелгән газондар үткәндә ҡаласаҡ. Ауылдарҙа ла яңы күтәрелеш күҙәтелә: ҡаланан ейән-ейәнсәрҙәр ҡайтып, олатай-өләсәйҙәренең ташландыҡҡа әйләнә башлаған йорт-ҡураһын рәткә килтерә, тергеҙә. Ошо күренештәр фонында яңы башлаусы һәм тәжрибәле баҡсасыларға яҡшы уңыш алыу өсөн бер нисә кәңәш тәҡдим итәбеҙ.**

# ТАШЛАНДЫҠҠА ӘЙЛӘНГӘН...

## йорт-ҡуралар тергеҙелһен



***Стәрлетамаҡ районынан Геннадий Переведенцев*** - 35 йыллыҡ тәжрибәһе булған баҡсасы. Уның баҡсаһы Шахтау итәгендә, ташлы ерҙә урынлашҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ауылда уның ҡыярҙары иң элек өлгөрә. Бының өсөн ул яңы тиҙәкте һәм яр буйындағы ҡара тупраҡты ҡуллана. Ә урман тупрағы бөтөнләй ярамай, ти ул. "Йәшелсәне иртә ултыртам. Әле һуған, кишер, картуф, петрушка, борсаҡ ултырттым. Тупраҡ кибә, ә ямғырҙар юҡ. Киләһе аҙнала ҡырауҙан һуң кәбеҫтә ултыртасаҡмын, - ти ул. - Былтыр, ҡоролоҡ булыуға ҡарамаҫтан, уңыш яҡшы булды. Һыуҙы күп итеп һиптем, көндәр ҙә йылы торҙо. Йәшелсә өсөн иң мөһиме: йылы һәм һыу. Ә бына баҡса еләге эҫене насар кисерҙе. Еләктәр майҙа уҡ өлгөрҙө. Ғәҙәттә, мин беренсе ҡарға тиклем еләк йыйһам, былтыр июндән һуң еләк бөттө. Бер ниндәй ҙә ашлама индермәйем, колорадо ҡуңыҙҙарына ағыу һипмәйем".

***Шишмә районынан Марина Григорьева*** кишерҙән мул уңыш ала. "Ғәҙәттә, кишер орлоғон үҙем, көҙөн йыйып алып, киптереп, ҡыш буйы уларҙы ултыртырға әҙерләйем, - ти ул. - Уңыш сере - ҡар дымы кипкәнгә тиклем ултыртып ҡалыуҙа. Ер дымлы булғанда ултыртһаң, һыу һибеү ҙә кәрәкмәй. Шулай уҡ кишер иркен үҫһен өсөн урын булдырыу ҙа зарур. Бының өсөн орлоҡто ултыртыр алдынан ҡом менән болғайбыҙ. Рәттәргә алдан көл һәм кипкән ылыҫ эңәләре һибеп сығабыҙ - улар кәрәкле витаминдар менән тәьмин итә. Ваҡытында һыу һибеп, утап, ерен йомшартып торғанда уңыш та үҙен оҙаҡ көттөрмәй".

***Шишмә ҡасабаһынан шәфҡәт туташы Таңһылыу Мамедова*** ла ерҙе органик эшкәртеү һөҙөмтәләре менән кинәнә: ул сәскәләр - пиондар, розалар, иристар, люпиндар һәм спирея үҫтерә. "Участкала буш ер булырға тейеш түгел, - ти ул. - Барлыҡ ергә седераттар, нигеҙҙә, гәрсис ултыртам. Ағастар тирәләй ултыртһаң, унда сүп үләндәре үҫмәй. 10-15 көн үтеп, йәшел масса бер аҙ күтәрелгәс, уны тәпке йәки плоскорез менән сабып сығырға кәрәк - был масса ерҙе дым китеүҙән һаҡлай. Киләһе яҙ арыған, ҡаты ер ашланған һәм мамыҡ кеүек йомшаҡ буласаҡ".

***Сығышы менән Учалынан булған Оксана Вәлиева*** тирә-яҡҡа помидорҙар үҫтереү оҫтаһы булараҡ танылған. Уның яратҡан сорттары - "Бычье сердце" һәм "Де барао". "Иң мөһиме, үҫентеләрҙе, тамырҙарҙы ҙурыраҡ булһын өсөн тәрәнгәрәк ултыртырға кәрәк - был осраҡта ул тупраҡтан күберәк туҡлыҡлы матдәләр ала. Томаттарға һыуҙы һирәк һибергә кәрәк: ике аҙнаға бер тапҡыр йылы һыу ҡойғанда емештәр фитофтора менән зарарланмаясаҡ", - ти ул.

***Ҡырмыҫҡалы районында йәшәүсе Радик Мусин*** өсөн картуфҡа инвестиция һалыу мәсьәләһендә иң мөһиме - сифатлы орлоҡ. "Ваҡ орлоҡтан эре картуф алырға өмөтләнмәгеҙ. Улай булмай! Шуға күрә көҙҙән тигеҙ, тауыҡ йомортҡаһы ҙурлығындағы картуфтарҙы һайлап, уларҙы ныҡлап елләтеп, яҙға тиклем һаҡлап һалып ҡуябыҙ. Эреләре боҙолорға мөмкин, ә һаҡлағанда йәки күсергәндә улар зарарланыуы ихтимал. Картуф ултырта торған ерҙе көҙҙән һөрөргә һәм тирес менән ашларға кәрәк - ул ваҡытта яҙғыһын ер ҡулланыуға әҙер була. Тәүге ҡояшлы көндәр етеү менән орлоҡто шыттырырға һалырға кәрәк. Бының өсөн уларҙы янған тирес менән бутап йылы урынға ҡуйыу мотлаҡ. Ултыртыу ваҡыты еткәс, шытҡан картуфты, шытымдарын һындырмай ғына "оярларға" һалып сығырға кәрәк. Бындай картуф тиҙерәк шытып сығасаҡ. Һәр соҡорға бер фасоль орлоғо ташлау ҙа файҙалы - ул тупраҡты азот менән байыта. Йәйгеһен картуф ике тапҡыр күмелә, утала. Ҡоролоҡ булғанда - һыу һибелә. Ике-өс йылға орлоҡто алмаштырып, яҡшы сортлыһын һайлап алырға кәрәк. Ул ваҡытта уңыш ҡыуандырыр", - ти Радик Мусин.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аҡса менән эш иткәндә

Иҫәптәрегеҙҙе түләргә аҡса табылды тип тынысланмағыҙ. Психиатрҙар һәм психологтар аҡсаға мөнәсәбәттә йыш күҙәтелгән характер һыҙаттарын һәм невротик симптомдарҙы асыҡлаған. Был тоҙаҡтар беҙҙе ҡабат элекке урыныбыҙға ҡайтарыуы мөмкин. Уларҙы тикшереҙән алда шуны аңлау зарур: аҡсаның килер урыны булғас, уның китер урыны ла булырға тейеш. Әлбиттә, һеҙ аҡсағыҙҙың бер өлөшөн һаҡларға тейешһегеҙ, әммә Илаһтың байлығы даими әйләнештә йөрөргә тейешлеген онотмағыҙ. Һеҙ - ошо байлыҡты үткәреүсе генә.

Аҡса мәсьәләһендә ҡайһы берәүҙәр алдына аныҡ маҡсат ҡуя белмәй. Һөҙөмтәлә улар аҡсаны енелелпе туҙҙыра, магазиндарға ашыға, ҡиммәтле әйберҙәр алып, үҙбаһаларын күтәрергә тырыша. Нисек кенә булмаһын, аҡсаны нимәгә туҙҙырыуығыҙҙы күҙәтегеҙ. Әгәр кредит карточкаһы менән иркен тотонаһығыҙ икән, түбәндәге ҡайтанан программалашыуҙы үтегеҙ:

Мин Илаһты биргән байлығы өсөн яратам.

Мин ул байлыҡты аҡыллы итеп, Илаһҡа ихтирам менән тотонасаҡмын.

Көсөргәнештән арынығыҙ һәм был һүҙҙәрҙе бер нисә көн дауамында көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Һуңынан, моғайын, магазинға һирәк йөрөп, ысынлап та кәрәкле генә әйберҙәр ала башлауығыҙҙы аңларһығыҙ.

Бәғзеләр өсөн аҡса - ҡомарлы уйындарҙа ҡатнашыу мөмкинлеге. Улар ипподромдарҙа, казинола йәки биржала ставкалар ҡуя. Еңеү кәйефен яҡшырта, еңелгәндән һуң еңеү шатлығын ҡайтарыу өсөн уйынды дауам итергә мәжбүр була. Әгәр һеҙ ҡомарлы саралрға битараф түгел икән, тимәк, ҡәнәғәтлектең бындай сығанағына өйрәнгәнһегеҙ. Ҡомар секс йәки наркотиктар кеүек үк, үҙенә ылыҡтыра. Мин һеҙҙән үҙегеҙҙе ҡайтанан программалаштырыуығыҙҙы һорарға йыйынмайым. Бары тик уйын төрөн үҙгәртеп, аттарҙан кешеләргә күсергә тәҡдим итәм. Кеше ярышында ставкалар күпкә ҡыҙыҡлыраҡ. Ҡыҙыҡһыныу даирәгеҙҙе алмаштырырға ярҙам иткән аффирмацияларҙы ҡабатлағыҙ:

Мин Илаһты алдымда йәйрәп ятҡан байлыҡ өсөн яратам.

Көн һайын алған байлыҡты, тормош уйынында ставка яһап, ижади һәм файҙалы ҡулланасаҡмын.

Шундай кешеләр ҙә бар, уларҙа аҡса йыйыу ҡомар уята. Характерҙың был һыҙаты аҡсаны туҙҙырыусылар һәм ҡомарлы уйындар яратыусылар осраған ҡыйынлыҡтарға килтермәй, шулай ҙа кешенең ғәмәлдәге унышатарына ҡамасаулауы бар. Кеше көрсөккә эләгеп, тормоштағы байлығынан ҡолаҡ ҡаҡҡас, уға икенсе юл эҙләргә кәрәк. Беҙ байлыҡ үткәреүселәр - шатлыҡ юлын үткәреүселәр булғас ҡына үҙебеҙгә байлыҡты тарта башлайбыҙ. Әгәр ағым менән ингән аҡсаның бер өлөшөн үҙегеҙҙең шатлыҡты, теләктәрегеҙҙе һәм өмөттәрегеҙҙе тормошҡа ашырыу өсөн йәлләйһегеҙ икән, тимәк, тормош энергияһының аҡса формаһында булған тәбиғи ағымы юлына кәртә ҡуяһығыҙ. Будыра алғандан әҙерәкте эшләйһегеҙ. Әгәр аҡсаны сейфҡа һалып һаҡлайһығыҙ икән, тимәк, "ҡара көн" килеүенән ҡурҡаһығыҙ. Үҙ-үҙегеҙҙә ышанысты күтәреүсе алдағы күнекмәләрҙә яҙылған аффирмациялар менән ҡайтанан программалағыҙ. Бынан тыш, ошондай ҡуйылыш менән ҡуллана алаһығыҙ:

Мин Илаһты мине урап алған байлыҡ өсөн яратам.

Мин байлыҡты именлеккә әйләндереү һәм киләсәктә лә байлыҡҡа өлгәшеү юлын эҙләйем.

Мин Ижадсының миңә биргән ҡатнашыусы ролен намыҫлы үтәйем.

Был аффирмацияны көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатлау бүрәләр ҙә туҡ, һарыҡтар ҙа иҫән булыу мөмкинлеген бирәсәк.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**

БЫЛ ҠЫҘЫҠ!

# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР



**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тигән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмғиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп craталыр?**

### Һаңғырауҙарға ярҙам итә

Йәш көйөнсә һаңғырау ҡалған Бетховен музыка яҙған саҡта үҙе сығарған мәшһүр мондо ишетә алмағаны өсөн ҡайғырып илар булған, тиҙәр. 2012 йылда 14 йәшлек гитарасы Джона Кон ишетмәгән кешеләргә лә музыканы тоя алыу мөмкинлеге бүләк итте.

Джона Кон Америкала 30 миллион кешенең һаңғырау икәнен, 8 миллион кешенең ишетеү аппараты ҡулланып йәшәүен, 200 меңдән ашыуының имплант менән йөрөүен белгәндән һуң, уйға ҡала. Нисек тә уларға ярҙам итеү теләге менән яна. Оҙаҡ та үтмәй, күп йылыҡтағы тулҡын аша музыка тапшырыусы ҡоролма уйлап таба. Бындай идея нисек тыуған һуң? Джона Кон гитараһына теше менән ҡағылғандан һуң, ундағы тулҡын тәьсиренең көсөнә иғтибар итә. Ябай тел менән әйткәндә, был ҡоролма музыка тулҡынын бөтөн тән менән тойорға мөмкинлек бирә. Бәләкәй генә тапшырғыстар, уларҙы Кон динамик тип атай. Улар бармаҡ осона кейҙерелә һәм шулар аша мейегә тулҡын ебәрелә. Тауыш тулҡыны тауышты күпкә көсәйтә, тип раҫлай йәш ғалим. Ысынлап та, Кондың ҡоролмаһы менән файҙаланған насар ишеткән кешеләр тауышты тукһан биш процентҡа яҡшыраҡ ишетеүен әйтәләр. Һәр хәлдә, һаңғырау кеше Бетховен әҫәрҙәрендәге аһәңлекте тотош тәне менән тыңлай ала. Бына шундай шатлыҡ кисереү мөмкинлеге бүләк итә уларға Джона Кон тигән ун дүрт йәшлек үҫмер. Ул үҙе йәш уйлап табыусылар конкурсында был асышы өсөн юғары бүләккә лайыҡ булды.

**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

## В.И. ЛЕНИН ИСЕМЕНДӘГЕ БӨТӘ СОЮЗ ПИОНЕРҘАР ОЙОШМАҺЫНА - 100 ЙЫЛ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**18-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Уҡлау. Кусимов. Һаҡмар. Ҡыртыш. Йоҙаҡ. Ырыу. Ҡуртым. Һарт. Бикәев. Фа. Метр. Ҡыяр. Лена. Тәнҡит. Әшәке. Сәләм. Кг. Киев. Нервы. Еҙнә. Кран.

**Вертикаль буйынса:** Йәнбикә. Һөҙләк. Мә. Ҡәберлек. Крем. Гәрәев. Арыш. Ҡусҡар. Асман. Һаҡ. Еләк. Ағуна. Лавр. Укол. Вена. Ҡырҡтартмасы. Минск. Торт. Шайморатов.

ШУНДАЙ ХӘЛ!

# ЕР УБЫЛДЫ...



**Ошо йылдың 6 майында сәғәт 02 лә 30 минутта Өфөнөң Урман тыҡрығы (Лесной проезд) 3/2 адресы буйынса ҡаланан Көнсығыш сығыу тарафында барған төҙөлөштә көньяҡ ер аҫты нығытмаһының тупрағы (штольня) өлөшләтә емерелеп төштө. Ул бынан 20 йыл элек үк ҡоролған булған. Нығытма урҙаһының береһе һынған. Был ер аҫты нығытмаһы төҙөлөш материалдары һәм тау ҡаҙыу эштәрендә тупланған тупраҡты сығарыу өсөн транспорт сифатында файҙаланылған.**

Ваҡиға урынына шундуҡ белгестәр килеп етә һәм маркшейдер мониторингы эшен башлайҙар. Белгестәр был урынды төҙөкләндереүҙе дауам итә. Хәүефһеҙлек маҡсатында был урын кәртәләп алынды һәм тәүлек әйләнәһенә ҡарауыл ҡуйылды.

2007 йылда Көнсығыш сығыу юлын төҙөү аҡса булмау сәбәпле туҡтатылғайны. Йыл һайын уны ҡарап тороуға республика ҡаҙнаһынан 200 млн һумдан ашыу аҡса бүленә килде. Көнсығыш юлы төҙөлөшөн тергеҙеү тоннель һуҙымында бындай хәлдәргә юл ҡуйманы. 2022 йылдың 6 майына ҡарата ер емерелгән был участкала Көньяҡ юл тоннеле төҙөлөшө эштәре алып барылмаған. Шул уҡ ваҡытта график буйынса был көньяҡ штольняла даими нығытма ҡуйыу ошо йылдың июненә ҡаралған булған. Был ваҡиғала зыян күреүселәр юҡ.

Белешмә: Көнсығыш сығыу юлы тоннеле төҙөлөшө торлаҡ ҡоролмалары һәм социаль әһәмиәттәге биналарҙан хәүефһеҙ аралыҡта алып барыла (Өфө ҡалаһы, Урман тыҡрығы урамы, Урмансылар паркы).

**БР Транспорт һәм юл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БУРЫС ҠАПЛАУ...

**Рәсәй юристар ассоциацияһының Башҡортостан бүлексәһе 2022 йылдың апрель аҙағы - майында көсөнә инәсәк закондарға аңлатма бирә:**

- Икенсе донъя һуғышы барышында СССР менән фашистик Германияның ролен халыҡ алдында асыҡтан-асыҡ тигеҙләштереп ҡараған өсөн граждандарҙан 1-2 меңгә тиклем штраф йәки 15 тәүлеккә тиклем административ ҡулға алыу; вазифалы кешеләрҙән 2-4 меңгә тиклем, юридик шәхестәрҙән 10-50 меңгә тиклем штраф түләтеү ҡарала (27 апрелдән). Ҡабатлап хоҡуҡ боҙоу осрағында яуаплылыҡҡа тарттырыла.

● **Инвалидлыҡ һәм ҡараусыһын юғалтыу сәбәпле пенсия алыусы балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлауҙы көсәйтеү (1 майҙан):** Ошоға тиклем инвалидлыҡ буйынса йәки ҡараусыһын юғалтыу сәбәпле пенсия алыусы үҫмерҙәр мәшғүллек үҙәге йүнәлтмәһе буйынса эшкә урынлашҡанда пенсияларына социаль өҫтәмәнән мәхрүм ителә ине. Яңы ҡағиҙә буйынса бындай өҫтәмә һаҡланып ҡаласаҡ. Бынан тыш, уға төп белем алыу программалары буйынса көндөҙгө тәртиптә уҡыусы йәш кешеләр 23 йәштәре тулғанға тиклем шулай уҡ хоҡуҡлы.

● **8-17 йәшкә тиклемге балаларға яңы пособиелар (1 майҙан):** Төбәк буйынса йән башына йәшәү минимумынан кәмерәк килемле ғаиләләрҙең 8-17 йәшлек балаларына айлыҡ түләүҙәр ҡарала. Ғаризаны 1 майҙан дәүләт хеҙмәте порталы аша йәки Рәсәй Пенсия фондына һәм Күп функциялы үҙәккә бирергә мөмкин. Аҡса апрель һәм май айҙары өсөн шундуҡ күсереләсәк. Нигеҙ күләменә һәр балаға төбәк буйынса йәшәү минимумының 50 проценты тәшкил итә. Уны алғандан һуң да ғаиләнең йән башына килеме йәшәү минимумынан кәмерәк көйө ҡалған осраҡта өҫтәмә 75 процентҡа тиклем арттырыласаҡ. Әгәр был өҫтәмә лә кәм булһа, түләү 100 процентҡа тиклем арттырыла.

● **Социаль түләүҙәрҙән тотоп ҡалыу бөтөрөлә (1 майҙан):** Бер тапҡыр түләнеүсе һәм айлыҡ социаль пособиеларҙы кредит түләүҙәргә, шулай уҡ башҡарыу ҡағыҙы буйынса тотоп ҡалыуҙар бөтөрөлә, ләкин шул уҡ ваҡытта бурыслының үҙенең ризалығы иҫәпкә алынасаҡ. Дәүләт социаль ярҙамы сиктәрендә аҙ тәьмин ителеүселәргә түләүҙәр ҙә шулай уҡ бурысты ҡаплауға күсереүҙән һаҡлана. Кеше алған түләүҙәрҙе бурысын ҡаплау иҫәбенә биргән хәлдә лә 14 көн эсендә уны кире ҡайтарып алыу хоҡуғына эйә. Бурыс ҡаплау иҫәбенә тотоп ҡалыу тыйылған социаль аҡсаларҙың тулы исемлеге менән "Башҡарыу ғәмәле тураһында" Федераль закондың 101-се статьяһында танышырға мөмкин.

● **Тиҙ түләүҙәр системаһы (СБП) буйынса сикләүҙәрҙе кәметеү (1 майҙан):** СБП буйынса бер тапҡыр операцияның иң юғары күләме 600 меңдән алып 1 миллионға тиклем арттырылды.

● **Цифрлы платформалар булдырыу ябайлаштырыла (1 майҙан):** Санкция шарттарында иҡтисад тотороҡлоғон тәьмин итеү буйынса Хөкүмәт юғары технологиялы сәнәғәт продукцияһы етештереү өсөн цифрлы платформалар эшләүсе һәм дәүләт субсидияһы алыусы Рәсәй IT компанияларына талаптарҙы йомшартты. Субсидиялар бүленгән комплекслы проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу ваҡыты 2 йылға оҙайтылды. Программа менән тәьмин итеүсе компаниялар ғәмәлдәге килешеүҙәргә ярашлы тәьминәт тәртибен өҙгән өсөн штраф санкцияларынан ҡотолдорола ала. 2020 йыл аҙағынан алып "Цифрлы технологиялар" федераль проект сиктәрендә Ватан IT компанияларына субсидиялар бүленә һәм ул программа продукттары эшләүгә сығымдарҙың 50 процентына тиклем ҡаплай.

● **Йорттарға реклама урынлаштырыуҙы унда йәшәүсе граждандар тыя ала (17 майҙан):** Урындағы властар күп фатирлы йорттарға реклама конструкциялары урынлаштырыуҙы ошо йортта йәшәүсе фатир милекселәре ризалығынан тыш рөхсәт итмәйәсәк. Һүҙ йорттағы дөйөм милеккә реклама ҡуйыу хаҡында бара. Йорт милекселәре ризалығы РФ Торлаҡ кодексында ҡаралған тәртиптә алынырға тейеш.

● **Контролдәге тауарҙар исемлеге булдырыла (26 майҙан):** РФ Хөкүмәте тарафынан экспорт контроле сиктәрендә контролләнеүсе тауар һәм технологиялар исемлеге раҫланасаҡ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЫСЫН ГЕРОЙ МЕНӘН ОСРАШЫУ

**Ошо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында легендар осоусы-штурмлаусы, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевҡа арналған "Герой йондоҙо" спектакленең премьераһы булды. Ул Фәрит Әхмәҙиев пьесаһы буйынса ҡуйылған, авторҙашы һәм ҡуйыусы режиссер Башҡортостандың халыҡ артисы Ольга Мусина. Ҡуйыусы рәссамы Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Юлиә Ғиләжева, видеоинсталляция авторы - Эльвира Теүәлева. Муса Гәрәев ролен йәш актер Әбйәлил Үтәбаев башҡара, ә уның тормош иптәше Галя Мигунова ролендә Юлиә Абрарова уйнай. Яңы спектакль тураһында уны ижад иткән кешеләрҙең, тамашасыларҙың фекерҙәрен һораштыҡ.**



***Фәрит Әхмәҙиев, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, пьеса авторы:*** Муса Гәрәев тураһында пьеса яҙыу идеяһы биш йыл элек үк барлыҡҡа килгәйне һәм мин уны яҙып, электрон вариантта сыҡҡан китабыма ла индергәйнем. Быйыл геройҙың юбилейы айҡанлы уны М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры бик тығыҙ ваҡыт эсендә сәхнәләштерҙе, ниһайәт. Бында авторҙашым Ольга Мусинаның хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Мин бик күп мәғлүмәтте бөртөкләп йыйып тәҙөгән биографик проектты йәнләндереп, сәхнә әҫәре талаптарына яраҡлаштырып, дөрөҫ ослап ҡуйырға ярҙам итте ул. Театрҙың ижади коллективының эше менән бик ҡәнәғәт ҡалдым, һәм бер мин генә шулай уйламаймыҙ, тамашасының да бик йылы ҡабул итеүен тойҙом. Евгений Муса улы ла ауыр һуғыш йылдарын иңгә-иң терәшеп бергә үткән атаәсәһе тураһындағы спектаклдең күңеленә ятыуы хаҡында белдерҙе.

Халыҡтың был пьесаны шулай йылы ҡабул итеүенең сәбәбе шунда: Муса Гәрәев ысынлап та милләттең йөҙө ул. Бөгөн беҙҙең художестволы әҙәбиәттә лә, шиғриәттә лә, драматургияла ла шундай бөйөк шәхестәрҙе сағылдырыу, улар тураһында ижад итеү һәм халыҡҡа өлгө булырҙай образдар тыуҙырыу бик кәрәк. Сөнки һуңғы осорҙа күп әҙиптәр милли холоҡо булмаған "бәләкәй кеше"не һүрәтләү менән мауыға. Ә бөгөн беҙҙең халыҡты яҡшы яҡтан күрһәткән персонаждар тыуҙырыу мөһим. Сәхнәлә башҡорт гел эсергә лә үҙ-үҙенә ҡул һалырға тейешме ни? Батырлыҡҡа, изгелеккә, ысын саф хисторға, илһөйәрлеккә, кешеләрҙең бер-береһенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәт күрһәтеүенә урын ҡалмағанмы ни хәҙер?

Рус телендә ҡуйылған "Герой йондоҙо" спектакле халҡыбыҙ күңеле ошоларға һыуһаған булыуын сағылдырҙы һәм "бысраҡ күп булған һайын кеше нығыраҡ ҡыҙыҡһына" тигән ҡараштың төптө дөрөҫ булмауын раҫланы. Муса Гәрәев кеүек ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Волга буйы округында бөтән юҡ, тип ғорурланды илештәр был спектаклдең премьераһында.

***Әбйәлил Үтәбаев, актер:*** Был минең тәүге төп ролем һәм бөйөк башҡорт шәхесен һынландырыу бик яуаплы эш булды. Әле Муса Гәрәевты үҙ күҙәре менән күреп белгән, уның менән аралашҡан өлкән быуын вәкилдәре арабыҙҙа бар һәм уларҙы ышандырырлыҡ итеп уйнау кәрәк ине. Минең өсөн иң ауыры - һуғыш осорондағы мөхитте дөрөҫ сағылдырыу булды, сөнки мин, шөкөр, һуғыш күрмәгән быуын кешеһе. Яугирҙарҙың хис-тойғоларын етерлек кимәлдә тойоп белеү өсөн бик күп фильмдар, шул осорҙағы документаль хроника яҙмаларын ҡараным. Бигерәк тә осоусының "Штурмовиктар һөжүмгә бара" автобиографик китабы геройымдың характерын, булмышын аңларға ярҙам итте. Шул мөхиткә инеп китеү, тулҡынланыу икенсе планға күсте. Аяҙ күк аҫтында тыуған быуын кешеһе өсөн ул замандағы кисерештәр ныҡ яҡын түгел, шуға күрә бындай темаларҙы яңынан күтәреп сығыу, асыҡлау, халыҡҡа күрһәтеү бик кәрәк һәм бигерәк тә илһөйәрлек тәрбиәләү йәһәтенән мөһим булыуын аңланым. "Герой йондоҙо" спектаклен айырыуса балаларға күрһәтергә кәрәк тип исәпләйем. Сөнки был спектаклдә һуғыш ҡына түгел, унда беренсе мөхәббәт, дуҫлыҡ, илһөйәрлек, юғалтыуҙар һәм тормош һынауҙарына бирешмәй йәшәүҙе, күңел күтәренкелеге һаҡлауҙы дауам итеү кеүек мөһим темалар сағылыш таба. Ул быуын кешеләре тормоштоң ҡәҙерен белгән, тиҙерәк йәшәргә ашыҡҡан.

***Гөлназ Әхмәҙиева, тамашасы:*** Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғанда Муса Ғайса улына ни бары 22 генә йәш була, шул арала ул ике тапҡыр юғары наградаға лайыҡ булған, был бит иҫ киткес хәл. Тағы ла геройҙың утлы һуғыш яланынан бер тапҡыр ҙа ҡаты яраланмай имен-һау сыға алыуы ғәжәпләндерҙе. Уның шәхесенә совет заманында тейешле хөрмәт күрһәтелгән дә булған, ләкин һуңғы йылдарҙа онотоп китеүебеҙҙән шундай һығымта яһарға кәрәк: илебеҙ батырҙарын тере сағында белергә, улар мәңгелеккә күсәс тә киләсәк быуындар хәтерендә һаҡлап ҡалыу өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ.

Әйткәндәй, май байрамдарында күрһәтелгән спектаклдә ҡарарға күп йәштәр килгәйне. Ҡайһы бер осраҡтарҙағы кеүек, театрҙа ирекһеҙҙең көнөнән ултырабыҙ, тигәндәй ҡыланыусылар һис булмана араларында, шул тиклем йотлоғоп ҡаранылар. Тимәк, был спектаклдә мотлаҡ бөтә ғаилә менән килеп ҡарарға кәрәк. Педагогиканың төп принциптарының береһе - үҙ үрнәгендә, сағыу шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләү. Тормошта ниндәйҙер уңышҡа өлгәшкән, матур кешелек сифаттарына эйә шәхестәрҙе күрһәтеп тәрбиәләү иң һөҙөмтәле ысулдарҙың береһе икәнен беләбеҙ. Бына был спектакль нәҡ шул талапҡа яуап бирә, киләсәгебеҙҙе үҙ башҡорттарыбыҙ өлгөһөндә тәрбиәләү бик мөһим. Юғиһә, һуңғы ваҡытта сит ил киноларын, әкиәттәрен ҡарап, сит геройҙар менән артыҡ мауығып китте балаларыбыҙ. Быны беҙҙе дөрөҫ яҡҡа йүнәлтмәүе лә асыҡ күренде бит инде. Уның урынын үҙебеҙҙең матур йолалар, образдар, шәхестәребеҙ алырға тейеш. Ә бит беҙҙең әле сәхнәгә күтәрә, ҙур экрандарҙан күрһәтә торған арҙаҡлыларыбыҙ бик күп.

Спектаклдең ҡуйылышына килгәндә инде, театрҙың күптәнге тоғро тамашасыһы булһам да, был юлы мине тағы ла аптырата, һоҡландыра алдылар. Күнелде тетрәндерерлек спектакль булды "Герой йондоҙо". Сәхнә биҙәлеше ябай ғына булһа ла һауалағы алыштарҙы сағылдырыу өсөн бик матур алым таба алғандар, актерҙар мөкиббән китеп уйнаны. Муса Гәрев ролен йәш актер Әбйәлил Үтәбаев башҡарҙы һәм ул бөтәһенең дә күңелен яғымлылығы менән арбаны. Ҡайһы саҡта ҡыйыуһыҙ ғына итеп йылмайып ҡуя ул, шул саҡта нишләп ул батырлыҡ һыҙаттарын күрһәтмәй, ҡурҡрәген киреп баһадирҙарса дөп-дөп баҫып атлап йөрөмәй икән, тип тә уйлайһың. Тик герой тормошта шундай баҫалҡы, итәғәтле, ябай кеше булған, тиҙәр, һәм был башҡорттарға хас һыҙаттар бит! Муса Гәрәевты халыҡсан итеп көйҙәләндерҙе театр һәм баш ҡала тамашасыһы уны ихлас ҡабул итте.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛҒАНДА - БИСМИЛЛА,

## биргәндә - әстәғәфирулла!

Аҡыллы кеше ҡайһы саҡта ашыға ул, әммә ашығып бер нәмә лә эшләмәй..

**(Ф. Честерфильд)**

Өлкән кешеләрҙең кәңәше ҡышҡы ҡояш кеүек: яҡтырта, әммә йылытмай.

**(Люк де Вовенарг).**

Ҡатын-ҡыҙ бары тик бер серҙе генә һаҡлай ала: үҙ йәше тураһындағы серҙе.

**(Вольтер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике кеше осрашҡан һәм уларҙың беренсеһе икенсеһенә сәләм биреп, шулай тиген:**

**- О, аҡыл эйәһе, һиңә оҙон ғүмер теләргә рөхсәт ит!**

**- Мин оҙон ғүмерҙән баш тартам! - тиген икенсеһе.**

**- Улай булғас, аҡыл эйәһенә байлыҡ теләргә рөхсәт ит!**

**- Мин байлыҡтан да баш тартам! - тиген икенсеһе.**

**- Ярай, улай булғас, мин һиңә күп улдарың булыуын теләйем!**

**- Юҡ, мин улдарҙан да баш тартам! - була яуап.**

**- Ғәжәп хәл! Күптәр теләй оҙон ғүмерле лә, бай ҙа, күп уланлы ла булырға… - тип аптырай беренсе кеше. - Ә ниңә һин былардан баш тартаһың?**

**- Оҙон ғүмерҙең аҙағы - туған һәм хәлһеҙләнгән ҡартлыҡ. Байлыҡ - ул артыҡ ығы-зығы, мәшәҡәт, тынысһыҙ йоҡо. Күп уланлы булғандар өсөн дә, тыныс көндәр бөттө, тиген һүҙ. Был өс теләкте тормошҡа ашырыуҙан ғына һин барыбер иң изге, иң аҡыллы кеше булып китмәйһең - шуға мин уларҙан баш тартам… - ти икенсе кеше.**

**-Мин һине тәүҙә аҡыл эйәһендәр тип ҡабул иткәйнем, - ти беренсе кеше, тамам төңөлөп. - Ә хәҙер тәрән хаталанғанымды аңланым. Уйлап ҡара әле, тәбиғәт бит кешеләрҙе яралтҡан саҡта һәр береһенә ниндәйҙер шөғөл бүләк иткән. Әгәр һинең күп уландарың бар һәм уларҙың һәр береһе ниндәйҙер шөғөлгә эйә икән, улар тураһында борсолорға кәрәкме һуң? Әгәр ҙә байлығың күп икән, уны башҡалар менән бүлешергә, ниндәйҙер изге эштәр атҡарыу өсөн тотонорға була, ул саҡта байлыҡтан баш ауырымаясаҡ. Аҡыллы әҙәмде байлыҡ камиллаштыра ғына һәм иң изгелекле кешегә әйләндерә. Ул саҡта иһә бындай кеше оҙаҡ йәшәүҙән дә ҡурҡмай, туҙыу, хәлһеҙләнеү, файҙаһыҙға әйләнеү тигәнде лә белмәй. Ҡартлыҡ һинең тәненә бер ниндәй ҙә зыян килтерә алмай. Ҡартлыҡ рухи ҡеүәт алдында көсһөҙ…**

**Шулай, ти ҙә беренсе кеше, аҡылһыҙ "аҡыл эйәһе" эргәһенән китеп бара…"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
13 май 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 584